БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫ ХАКИМИӘТЕ
МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ

БАШҠОРТ ТЕЛЕ (ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ) ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ КАРТАЛАРЫН ҠУЛЛАНЫУ

Өфө ҡалаһы ҡала округы «58-се лицей» муниципаль
автоном дөйөм белем биреү учреждениеһының
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Ғәзизова Әлфиә Рәүеф ҡыҙының эш тәжрибәһе

Өфө, 2021

УДК 376.1
ББК 74.268.0

Башҡорт теле (дәүләт теле) дәрестәрендә телмәр үҫтереү карталарын ҡулланыу. (Өфө ҡалаһы ҡала округы «58-се лицей» муниципаль автоном дөйөм белем биреү учреждениеһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғәзизова Әлфиә Рәүеф ҡыҙының эш тәжрибәһенән): Уҡытыусылар өсөн методик ҡулланма. – Өфө: Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2021. – 42 бит.

Редакцион коллегия:
Хаффазова Е.Р., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы;
Арыҫланов В.З., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары;
Шеина О.В., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы директоры;
Йосопова А.Ғ., Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығының баш белгесе;
Рәхмәтуллина С.Х., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһының бүлек мөдире;
Шәрәфетдинова З.Т., Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

Методик ҡулланмаға Өфө ҡалаһы ҡала округы «58-се лицей» муниципаль автоном дөйөм белем биреү учреждениеһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғәзизова Әлфиә Рәүеф ҡыҙының эш тәжрибәһе тупланды.

Методик ҡулланма уҡытыусыларға Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы башҡорт теле (дәүләт теле) дәрестәрен өйрәнгәндә ҙур ярҙам булып торасаҡ. Йыйынтыҡ башҡорт теле уҡытыусылары, юғары уҡыу йорттары һәм педагогия колледждары студенттарына, башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

© Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы Хакимиәте мәғариф идаралығы
© Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы

Йөкмәткеһе

Аңлатма яҙыу ... 4
Танышыу /. Знакомство ... 12
Был – мин / Это я ... 14
Минең ғаиләм / Моя семья ... 16
Мәктәбем / Моя школа ... 18
Уйынсыҡтарым, дуҫтарым менән уйнайым / Играю с друзьями, игрушками ... 20
Аҙыҡ-түлек. Һауыт-һаба / Продукты питания. Посуда ... 22
Кейем-һалым / Одежда ... 24
Тәбиғәт. Йыл миҙгелдәре / Природа. Времена года ... 26
Тыуған илем – Башҡортостан. Өфө / Моя Родина – Башкортостан. Уфа ... 28
Хайуандар донъяһы. Ҡоштар / Животный мир. Птицы ... 31
Һаулыҡ / Здоровье ... 33
Спорт ... 35
Һөнәрҙәр / Професии ... 37
Үҫемлектәр / Растительный мир ... 39
Сәйәхәт / Путешествие ... 41

Аңлатма яҙыу

Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыу икенсе кластан, туған тел беренсе кластан башлап уҡытыла. Эш программаларына ярашлы, дәрес темалары тематик төркөмдәргә бүленеп бирелгән. Йыл һайын тематик төркөмдәр тулыландырыла бара. Һәр темаға ҡараған һүҙлек кимәле, мәғлүмәт арта. Аҙнаһына бер сәғәт эсендә бирелгән материал бик тиҙ үтелеп бөтә. Был темаларға ҡараған һүҙҙәрҙең бик аҙы ғына бала хәтеренә һеңеп ҡала. Ә беҙҙең бурыс – башҡортса телмәр тыуҙырыу. Тимәк, балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, хәтерен үҫтереүсе алымдарға өҫтөнлөк бирергә тейешбеҙ. Шундай уңышлы алымдарҙың береһе – интеллект карталар ҡулланыу.

Методик әсбаптың маҡсаты – дәүләт телен уҡытыу эшен һөҙөмтәле итеп уҡытыуҙа яңы алым тәҡдим итеү, телмәр компетентлығын формалаштырыуҙа ярҙам итерлек материал менән уртаҡлашыу.

Британия психологы Тони Бьюзен – үҙ-үҙеңде камиллаштырыу, хәтерҙе, фекерләүҙе үҫтереү өлкәһендә бик күп тикшеренеүсе белгес. Ул студент сағынан белем алыу процесында бирелгән мәғлүмәттәрҙе хәтерҙә ҡалдырыу ысулдарын эҙләй. Баш мейеһенең төҙөлөшөн, үҙенсәлектәрен, нейрофизиологияны, нейролингвистиканы өйрәнгәндән һуң, үҙенең фекерләү ҡеүәһен үҙгәртергә кәрәк икәнлеген аңлай. Мейеләге нейрондарҙың төҙөлөшөн күреп иҫе китә. Баҡтиһәң, улар тармаҡланған ағас формаһында икән. Шул формаға нигеҙләнеп, фекерләү карталарын төҙөй ҙә инде.

Интеллект карталарҙың тәбиғилек принцибына таянып төҙөлөүе күләмле мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыуға булышлыҡ итә. Сөнки кеше организмының барлыҡ функциялары, шул иҫәптән фекерләү процесы ла, тәбиғи йүнәлештә булырға тейеш.

Интеллект карталар төҙөлөшө буйынса бик ябай. Аҡ ҡағыҙҙың уртаһына билдәле бер теманы яҙабыҙ һәм унан төрлө яҡҡа тармаҡландырып ошо темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе күрһәтәбеҙ. Һәр йүнәлеш төрлө төҫлө булырға тейеш. Төҫтәр ни тиклем күберәк булһа, мәғлүмәт шул тиклем ныҒыраҡ хәтерҙә ҡала. Артабан, был төп йүнәлештәрҙән тағы ла тамырҙар ебәреп, һүҙҙәр яҙырға кәрәк. Һәр тамыр йәки ботаҡ тик бер һүҙле һәм төрлө төҫлө була. Төп теманы белдергән үҙәк һүҙ ҡалын хәрефтәр менән яҙылырға тейеш.

Бирелгән темаға ҡараған иң кәрәкле һүҙҙәрҙе теркәү процесында бала төрлө ассоциациялар күҙ алдына килтерә, кәрәкле мәғлүмәтте иҫендә ҡалдыра. Карталарҙы төҙөү процесын дәрестә, уҡыусылар менән берлектә ойоштороРға мөмкин. Был эш уларҙың когнитив һәләттәрен үҫтерә. Сөнки интеллект карталар төҙөү, уларҙы иҫтә ҡалдырыуҙа баш мейеһенең ике ярымшары ла ҡатнаша. Һүҙҙәр урынына шулай уҡ һүрәттәр ҙә ҡулланырға мөмкин.

Интеллект карталарҙы башланғыс кластарҙа башҡорт дәүләт телен уҡытыуҙа уңышлы алым тип таптыҡ. Бәләкәй күләмле карталарҙан башлап

башланғыс синыфты тамамлауға уртаса күләмле картаға күсәбеҙ, балаларҙың һүҙлек кимәле лә икенсе класты тамамлауға башҡортса аралашыу өсөн 5-6 һөйләм төҙөрлөк, һорауҙарға яуап бирерлек була.

Карталар менән эш шулай уҡ предмет, метапредмет, шәхси һөҙөмтәләрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Башҡорт теленә, башҡорт халҡына һәм уның мәҙәниәтенә хас формалар ҙа ҡулланып була. Мәҫәлән, кәрәҙ формаһын ҡулланыу. Ете күҙәнәктән торған кәрәҙ формаһының уртаһына үҙәк темаға ҡараған һүрәт йәки һүҙ беркетелә. Сәғәт телдәре йөрөшө буйлап был темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе яҙып йәки һүрәттәр ҡуйып сығабыҙ.

Уҡыусылар бындай ижади эште үҙҙәре лә ихлас башҡаралар.

Бөйөк халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғырында әйтелгәнсә, беҙ балалар менән халыҡтың сәскә күңеленән бал ҡорттары һымаҡ һүҙҙәрынйылар йыябыҙ ҙа матур мәғәнәле текст – хуш еҫле кәрәҙ ҡоябыҙ. Кәрәҙҙең һәр күҙәнәге темаға ярашлы һүрәттәр менән тултырылырға мөмкин. Темаға ярашлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе иҫтә ҡалдырғас, балалар ваҡыт үтеү менән был темаға ҡараған тексты тиҙ иҫкә төшөрәләр.

Шулай уҡ интеллект карталарҙы онлайн вариантта ла эшләргә мөмкин. Бының өсөн һәр уҡытыусы, https://www.mindmeister.com/ru сайтында шәхси кабинет асып, кәрәкле темаға онлайн карталар эшләй ала. Был сайтта карталар төҙөр өсөн бөтә кәрәкле материалдар ҙа бар.



Интеллект карталар менән төрлө грамматик эштәр башҡарырға мөмкин.

Мәҫәлән, «Мәктәп» темаһына ҡараған карта:

1. Карталағы һүрәттәргә ҡара, белгән һүҙҙәрҙе әйт.
2. Кемдәрҙе йәки нимәләрҙе күрәһең?
3. Һәр һүҙ менән һүҙбәйләнеш төҙө.
4. Темаға ярашлы бер нисә һөйләм төҙө.
5. Уҡытыусы һәм уҡыусы менән бәйле телмәр ситуацияһын төҙө.
6. Яраткан шөғөлөң тураһында һөйләм төҙө.
7. Һеҙҙең кабинетығыҙҙа нимәләр бар?
8. Класташың ниндәй? һ.б. һорауҙар.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү өсөн кәрәҙ формаһында төҙөлгән карталар шулай уҡ уңайлы. Башланғыс кластарҙа эштәр ябайыраҡ булһа, өлкәнерәк кластарҙа грамматик эштәрҙе ҡатмарлыраҡ, әммә уҡыусы эшләй алырлыҡ итеп бирергә мөмкин.

Тематик телмәр үҫтереү карталарын таблицалар ярҙамында ла бирергә мөмкин. Унда билдәле бер темаға ҡараған яңы һүҙҙәр, төрлө яһалыу юлдары менән төҙөлгән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, телмәр ситуациялары, текстар туплана. Һүҙҙәр һүҙ төркөмдәренә ҡарап урынлаштырыла. Әммә уларҙы уҡыусы айырым түгел, ә контекста иҫтә ҡалдырырға тейеш. Бирелгән телмәр берәмектәрен грамматик тема менән дә бәйләргә була. Текст эсендә яңы һүҙҙең ҡулланылыу формалары, урыны, кимәле күренә һәм бала аңында телмәр берәмектәре системаға һалынып бара.

МӘКТӘБЕМ. МОЯ ШКОЛА.

ЯҢЫ ҺҮҘҘӘР

ай – месяц
алды – перед
ашхана – столовая
баһа – оценка
белем – знание
бина – здание
ваҡыт – время
дәрес – урок
дәреслек – учебник
дәфтәр – тетрадь
ишек – дверь
ихата – двор
йыл – год
көндәлек –дневник
китап – книга
китапхана – библиотека
кәштә – полка
күнегеү – упражнение
ҡабатлау – повторение
ҡат – этаж
ҡағиҙә – правило

ҡыңғырау – звонок
ҡәләм – карандаш
майҙан – площадка
миҫал – пример
мәктәп – школа
сәғәт – часы, время
сәхнә – сцена
таҡта – доска
тамаша залы – актовый зал
тәҙрә – окно
урын – место
уҡытыусы – учитель
уҡыусы – ученик(ца)
усаҡ – костер
хата – ошибка
һорау – вопрос
һуҡмаҡ – тропа
эш – работа
әсбап – пособие
янында – рядом

белемле – образованный
иркен – просторный
ҡатмарлы – сложный
насар – плохой
тырыш – старательный
тәртипле – воспитанный
төрлө – разные
уңышлы – успешный
хөрмәтле – уважаемый(ая)
һәйбәт – хорошо, хороший
һуңғы – последний
яҡты – светлый

бөгөн – сегодня
иртәгә – завтра
кисә – вчера

алырға – получать
ашығырға – торопиться
баҫып торорға – стоять
белем алырға – получать знания
белергә – знать
борсолорға – расстраиваться
күрһәтергә – показать
ҡала – остается
ҡуйырға – ставить, поставить
ойошторорға – организовать
осратырға – встретить
планлаштырырға – планировать
сығыш яһарға – выступать
сисергә – решать что-то
төҙәтергә – исправлять
тултырырға – заполнять
тырышырға – стараться
уҡырға – учиться, читать
ултырырға – сидеть
үткәрергә – проводить
әҙерләнергә – готовиться к чему-либо
әҙерләргә – готовить что-то
яҙырға – писать
ярышырға – соревноваться

бөтә – все
унда – там
һәр – каждый

зинһар – пожалуйста
иң – самый
һәм – и
шулай уҡ – так же

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Белем көнө, мәктәп уҡыусылары, уҡыусы көндәлеге, яҡшы баһа, насар баһа, хөрмәтле уҡытыусы, белемле уҡыусы, доклад әҙерләргә, семинарға әҙерләнергә, сәхнәлә сығыш яһарға, уҡырға ваҡыт, һуңғы ҡыңғырау, миҫал сисергә, көндәлек тултыра, китапханала ултыра, мәктәп ишеге, мәктәп алды.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Мәктәп – белем усағы.
Минең ҡустым ҙур һәм матур мәктәптә белем ала.
Беҙҙең мәктәп бинаһы дүрт ҡатлы.
Башҡорт теле кабинеты яҡты һәм ҙур.
Бөгөн ағайым һуңғы ҡыңғырауға китте.
Дуҫым менән бергә беҙ класта иң тәртипле уҡыусылар.
Класташым мине ашхана янында осратты.
Яҡшы уҡырға теләгән уҡыусы китапхананы ярата.
Насар баһа алһам, әсәйем борсола.
Апайым университетта һәйбәт уҡый, шуға иртәгә семинарҙа сығыш яһай.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм!
– Сәләм!
– Азат, ҡайҙа ашығаһың?
– Дәрескә. Доклад менән сығыш яһарға кәрәк.
– Әҙерләндеңме?
– Эйе, презентацияны ла әҙерләнем.
– Ярай, уңышлы сығыш һиңә.
– Рәхмәт, Ринат. Осрашҡанға тиклем!
– Хуш!

– Һаумыһығыҙ, Зөлфиә Зөфәровна.
– Һаумы, Айнур. Ниндәй һорау менән килдең?
– Кисә эшләгән эшемдең хаталарын төҙәтергә килдем. Ярҙам итегеҙ әле.
– Әйҙә, төҙәтәйек. Ултыр.
– Рәхмәт, Зөлфиә Зөфәровна.
– Ярай, ҡағиҙәне ҡабатла. Тырышып уҡы.
– Һау булығыҙ.
– Һау бул.

ТЕКСТ

Мин – Дамир, 5-се класс уҡыусыһы. Өфө ҡалаһының 15-се мәктәбендә белем алам. Беҙҙең мәктәп ҙур, дүрт ҡатлы. Бөтә кабинеттар ҙа яҡты, иркен. Шулай уҡ мәктәп бинаһында спорт залы, тамаша залы, ашхана һәм китапхана бар. Минең иң яратҡан урыным – китапхана һәм спорт залы.

Мәктәп ихатаһында ҙур спорт майҙаны бар. Унда беҙ төрлө спорт уйындарын уйнайбыҙ, ярыштар ойоштораБыҙ.

Беҙҙең мәктәптә юғары квалификациялы ихтирамлы уҡытыусылар эшләй. Минең яратҡан дәресем – математика. Миңә ҡатмарлы миҫалдар сисергә оҡшай.Уҡытыусылар беҙгә ныҡлы белем бирә. Беҙгә тырышып белем алырға ғына ҡала.

МӘҠӘЛДӘР

Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау – ғәйеп.
Белем – энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең йөрәге тыныс.
Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
Уҡыу – белем шишмәһе.
Аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә, мул төшә.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән, байлыҡтың ҡәҙере йомартлыҡ менән.
Аҡыллы кеше алдамаҫ та, алдатмаҫ та.

Һүҙлек бүлеге менән грамматик күнегеүҙәр:

1. Микротемаларға айырыу.
2. Тамырҙаш һүҙҙәр табыу.
3. Синоним, антонимдар табыу.
4. Сингармонизм законына ярашлы йыйыу.
5. Ижектәргә бүлеү.
6. Баҫым ҡуйып сығыу.

7. Сифат – исем, рәүеш – ҡылым һ.б. Һүҙбәйләнештәр төҙөү.
8. Һәр һүҙгә ассоциациялар табыу.
9. Тәржемә итеү.
10. Күплек ялғауҙарын ҡушыу.
11. Килеш менән үҙгәртеү.
12. Эйәлек ялғауҙарын ҡушыу.
13. Һүҙбәйләнеш төҙөү.
14. Зат, заман менән үҙгәртеү һ.б.

Карталар еңелдән ауырға, интеграция (өлөштәрҙе берләштереү), дифференциация (өлөштәргә тарҡатыу) һәм функционаллек (һүҙҙәрҙе телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланыу) принциптарына таянып эшләнә. Унда бирелгән телмәр берәмектәрен дәрестең төрлө этабы, формалары менән бәйләргә мөмкин. Мәҫәлән, яңы тема өйрәнеү дәресендә иғтибар күберәк уҡыусыға таныш түгел һүҙҙәргә, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөүгә бүленһә, ҡабатлау дәресендә телмәр ситуациялары һәм текст төп урынды яулай. Диалогтарҙы дәрес башында ҡабатлау өсөн дә, белемдәрҙе активлаштырыу маҡсаты менән дә индерергә була.

Телмәр карталарын төҙөү, улар буйынса дәрестән дәрескә эшләү шулай уҡ балаларҙың когнитив һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә: уҡыусы һүрәттәргә ҡарап һүҙҙәр таба, һүҙҙәрҙе күрә, ишетә, әйтә, ҡабатлай һәм иҫендә ҡалдыра.

Шулай итеп, тематик телмәр үҫтереү карталары башҡорт теленән кәрәкле һүҙлек запасы булдырыуға, телмәр практикаһында һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡуллана белергә булышлыҡ итә. Методик әсбап башҡорт телен уҡытыуҙа һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн уҡытыусыға ҙур ярҙам булып тора һәм уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереүҙә файҙаланыу өсөн тәҡдим ителә.

Төп өлөш. Тематик интеллект карталар.

Телмәр үҫтереү өсөн темалар.

1. Уҡытыусы. Кем? Ниндәй? Нимә эшләй?
2. Мин – өлгөлө уҡыусы. Класташтарым кем. Минең дуҫ класташым.
3. Минең шөғөлдәрем. Көн режимым. Эш һөҙөмтәләрем.
4. Беҙҙең яҡты һәм матур кабинет. Нимәләр бар? Ҡайҙа тора? Ниндәй?
5. Уҡырға, белем алырға яратам. Китап – белем шишмәһе. Ниндәй китап уҡыйым?
6. Уҡыу кәрәк-яраҡтары. Пеналымда нимә бар? Төҫтәр.
7. Мин уҡыған мәктәп. Мәктәп ҡайҙа урынлашҡан? Ниндәй? Мәктәпте тамамлаған танылған кешеләр.

Минең ғаиләм

Телмәр үҫтереү өсөн темалар.

1. Ғаиләмдә нисә кеше? Мин нисәнсе бала? Кемдәр бар?
2. Табын артында. Татыу ғаилә. Әҙәплелек ҡағиҙәләре.
3. Кем нимә менән шөғөлләнә?
4. Беҙҙең ғаилә спорт ярата.
5. Минең шәжәрәм. Туғандар менән аралашам.
6. Өләсәйем, олатайым менән үҫәм. Мин ихтирамлы, иғтибарлы бала.
7. Әсәйем эштә саҡта. Мин ярҙамсы.
8. Өлгөлө ғаиләлә йәшәйем.

Телмәр үҫтереү өсөн темалар.

1. Әсәй – минең иң яҡын кешем. Әсәйем ҡулдары.
2. Әсәйем-ярҙамсым.
3. Туғанымды үҫтерешәм.
4. Әсәйем йырлап йоҡлата. Әсәйем тауышы.
5. Әсәйем менән бергәләп әкиәт донъяһында.
6. Әсәйемдең тәмле аштары. Бешерергә өйрәнәм.
7. Татыу балалар. Әсәйем -өйөбөҙ йәме.

ТАНЫШЫУ. ЗНАКОМСТВО.

ҺҮҘҘӘР

сәләм – привет
һаумы(һығыҙ) – здравствуй(те)
хуш(ығыҙ) – до свидания
һау бул(ығыҙ) – до свидания
исем(ем, ең) – имя
фамилиям(яң) – фамилия
дуҫ(ым, тар) – друг, мой друг, друзья
йәш – лет, возраст
көн – день
ҡала(һында) – город, в городе
мәктәп(тә, кә) – школа, в школе, в школу
осрашыу – встреча
танышыу(ыма, ыбыҙға, ығыҙға) – знакомство(у)
теләк – пожелание
уңыш(лы) – успех, успешный
һан – числительное

мин(ең, ңә) – я; мой, моя, мое, меня, мне
һин(ең, ңә) – ты; твой, твоя, твое; тебя, тебе
ул(ның, ға) – он (она), его (её), ему (ей)
беҙ(ҙең, гә) – мы, наш, нам
һеҙ(ҙең, гә) – вы, ваш, вам
улар(ҙың, ға) – они, их, им
был – это, кем – кто
ҡайҙа – где, куда
нисек – как

бер(енсе) – один, первый
ике(нсе) – два, второй
өс(өнсө) – три, третий
дүрт(енсе) – четыре, четвертый
биш(енсе) – пять, пятый
алты(нсы) – шесть, шестой
ете(нсе) – семь
һигеҙ(енсе) – восемь, восьмой
туғыҙ(ынсы) – девять, девятый
ун(ынсы) – десять, десятый

таныш булайыҡ – будем знакомы
шатланырға– радоваться
шатмын – рад(а)
барам(йыҡ, быҙ) – иду, хожу, пойдем, ходим
риза – согласен(на)
теләргә – желать
теләй(ем, һең, беҙ) – желаю(ешь, ем)
йәшәй(ем, һең, беҙ, һегеҙ, ҙәр) – живет, живу, живешь, живем, живете, живут
дуҫлашырға – дружить

яҡшы – хорошо
бергә – вместе
түгел – не
тағы ла – еще, снова
менән – и, со, вместе с
рәхмәт – спасибо
эйе – да
юҡ – нет
бар – есть

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Минең исемем, һинең исемең, уның исеме, исемең(егеҙ)нисек, таныш булайыҡ, танышыуыма шатмын, теләктәр теләйем, осрашҡанға тиклем, мәктәптә уҡый(ым, һың, быҙ, һығыҙ, ҙар), мәктәпкә барам, Өфө ҡалаһы, Өфө ҡалаһында.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Минең исемем …
Минең фамилиям…
Һинең исемең нисек? Һин кем?
Миңә һигеҙ йәш. Ә һиңә нисә йәш?
Мин мәктәптә уҡыйым.

Мин мәктәпкә барам.
Танышыуыма шатмын.
Танышыуығыҙға шатмын.
Танышыуыбыҙға шатмын.
Өфө ҡалаһында йәшәйем.

Марат дуҫлашырға теләй.
Мин икенсе класта уҡыйым.
Уңышлы көн һеҙгә.
Мин мәктәпкә барам, әйҙә. бергә барайыҡ.
Миңә ун йәш түгел, һигеҙ йәш.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм!
– Сәләм!
– Һинең исемең нисек?
– Минең исемем…
– Ә һинең исемең кем?
– Мин…
– Һиңә нисә йәш?
– Миңә һигеҙ йәш. Ә һиңә?
– Миңә туғыҙ йәш.
– Мин танышыуыбыҙға шатмын.
– Мин дә шатланам.
– Рәхмәт.
– Ярай, хуш! Осрашҡанға тиклем.
– Һау бул!

– Һаумы.
– Һаумы.
– Таныш булайыҡ, мин …, ә һин кем?
– Мин…. Танышыуыма шатмын.
– Мин мәктәпкә барам, әйҙә, бергә барайыҡ.
– Мин риза. Әйҙә, барайыҡ.

– Һаумы.
– Һаумыһығыҙ.
– Һинең исемең кем?
– Исемем…
– Ә һинең исемең кем?
– Һиңә нисә йәш? Ун йәшме?
– Миңә ун йәш түгел, һигеҙ йәш.
– Яҡшы. Һин мәктәптә уҡыйһыңмы?
– Эйе. Мин икенсе класта уҡыйым.
– Афарин. Ярай, хушлашайыҡ. Һау бул.
– Һау булығыҙ. Уңышлы көн һеҙгә.

ТЕКСТ

– Һаумыһығыҙ. Мин …, фамилиям…. Миңә һигеҙ йәш. Мин мәктәптә икенсе класта уҡыйым. Һеҙҙең менән танышыуыма шатмын. Һеҙгә уңышлы көн теләйем.

– Һаумыһығыҙ. Таныш булайыҡ. Минең исемем…, фамилиям…. Мин Өфө ҡалаһында йәшәйем. Икенсе класта уҡыйым. Минең дуҫтарым бар. Мин улар менән бергә уҡыйым. Һеҙҙең менән танышыуыма шатмын.

– Һаумыһығыҙ. Таныш булығыҙ. Был – Марат. Уның фамилияһы – Әхтәмов. Марат беҙгә Өфө ҡалаһынан килгән. Уға туғыҙ йәш. Ул өсөнсө класта уҡый. Марат һеҙҙең менән дуҫлашырға теләй. Мин танышыуығыҙға шатмын.

МӘҠӘЛДӘР

Аралар тыныс булһа, ғаилә ҡорос була.
Таныған ерҙә буйға хөрмәт, танымаған ерҙә тунға хөрмәт.
Һөйләй-һөйләй сәсән булырһың, күрә-күрә күсәм булырһың.
Кешене белгең килһә, бер һүҙенә ҡара, бер эшенә ҡара.
Кешенең төҫ матурлығы матур түгел, эш матурлығы матур.

БЫЛ – МИН. ЭТО Я.

ҺҮҘҘӘР

ағза – орган, часть тела
арҡа – спина
ауыҙ – рот
аяҡ(ғым, ғың, ғы, тар) – нога(и)
бармаҡ(тар) – палец(цы)
баш(ым, ың, ы) – голова
буй – рост
еҫ – запах
керпек – ресницы
күҙ(ҙәр) – глаз(а)
йән – душа
кеше(ләр) – человек, люди
ҡаш(тар) – бровь(и)
ҡолаҡ(тар) – ухо (уши)
ҡыҙ – девочка
малай – мальчик
муйын – шея
ҡул(дар) – рука(и)
сират(та) – очередь, в очереди
сәс(тәр) – волос(ы)
табип(ҡа, та) – врач, к врачу, у врача
таҙалыҡ – чистота
танау – нос, тел – язык
теш(тәр) – зуб, зубы
тән(ем) – тело, мое тело
түңәрәк – кружок
хәрәкәт – движение
һаулыҡ – здоровье
һауа – воздух
эс – живот

бысраҡ – грязный
ҙур – большой
күп – много
көслө – сильный
ҡыҫҡа – короткий
ҡуйы – густой
оҙон – длинный
таҙа – чистый
оҙаҡ – долго
саф – чистый
сәләмәт – здоровый

ауырта – болит
ауыртмай – не болит
ауырырға – болеть
ауырымаҫка – не болеть
булырға – быть
ишетергә – слышать
күрергә – видеть
ҡарарға – смотреть
һиҙергә – ощущать
килергә(дем, дең, гән, дек, дегеҙ, гәндәр) – прийти, пришел, пришли
ултырырға – сидеть
ултыра(м, аһың, а, быҙ, һығыҙ, лар) – сидит, сижу, сидишь, сидим, сидите, сидят
үҫергә – расти
үҫә(м, һең, ә, әбеҙ, әһегеҙ, әләр) – растет, расту, растешь, растем, растете, растут
һаҡлау – беречь
һаҡланыу – беречься
һыҙларға – ныть, болеть
шөғөлләнергә – заниматься
яратырға – любить

кәрәк – надо
өсөн – для
сөнки – потому что
тейеш – должен, должны
һәр саҡ – всегда
шуға – поэтому
ярай – можно
ярамай – нельзя

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Минең тәнем, көслө тән, сәләмәт тән, оҙон сәс, матур ҡыҙ, баш ауырта, теш ауыртмай, табипҡа сират, сиратта ултыра, табипҡа килгән, мин үҫәм, ҙур булам, ауырырға ярамай, һаулыҡ һаҡлау, еҫ һиҙеү, ҡолаҡ менән ишетеү, күҙ менән күреү.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Был мин. Был минең башым.
Минең башым ауыртмай.
Һинең тешең ауыртамы?
Дауаханала сират юҡ.
Сәләмәт тәндә – сәләмәт рух.
Мин таҙалыҡ яратам.
Табипҡа барырға кәрәк.
Малайҙар һәм ҡыҙҙар теш табибына сиратта ултыра.
Ауырырға ярамай, һаҡланырға кәрәк.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Һаумыһығыҙ.
– Һаумыһығыҙ. Һеҙ кемгә килдегеҙ?
– Мин терапевҡа килдем. Сират бармы?
– Сират ҙур түгел, ултырып тороғоҙ.
– Рәхмәт.

– Һаумыһығыҙ.
– Һаумыһығыҙ. Нимә булды?
– Минең тешем ауырта?
– Ултырығыҙ, ҡарайыҡ. Ауыҙығыҙҙы асығыҙ.
– Тештәрегеҙҙе дауаларға кәрәк.
– Рәхмәт. Мин риза. Дауалайыҡ.

– Һаумы.
– Һаумыһығыҙ.
– Һинең исемең кем? Һин Лилиәме?
Миңә Лилиә – оҙон сәсле ҡыҙ, тинеләр.
– Эйе. Мин оҙон сәсле матур ҡыҙ Лилиә.
– Ә мин – Әмир. Танышыуыма шатмын.
– Мин дә.

ТЕКСТ

Һаумыһығыҙ. Мин …, фамилиям…. Миңә һигеҙ йәш. Мин – оҙон буйлы, ҡуйы ҡара сәсле, ҡыйғас ҡашлы матур малай. Сәләмәт тәндә – сәләмәт рух. Шуға мин спорт менән шөғөлләнергә яратам. Ҡулдарым һәм аяҡтарым көслө, сөнки мин бокс түңәрәгенә йөрөйөм. Таҙалыҡ яратам. Ауырымаҫ өсөн тән һәр саҡ таҙа булырға тейеш. Һеҙҙең менән танышыуыма шатмын. Һеҙгә уңышлы көн теләйем.

Һаумыһығыҙ. Минең исемем …. Миңә туғыҙ йәш. Мин өсөнсө класта уҡыйым. Тәнегеҙҙең һау-сәләмәт булыуын теләһәгеҙ, хәрәкәт, таҙалыҡ яратығыҙ. Кеше аҙ ултырырға, күп хәрәкәт итергә тейеш. Шуға компьютерҙа оҙаҡ ултырмағыҙ. Матур буйлы булыр өсөн спорт менән шөғөлләнергә, саф һауала күберәк йөрөргә кәрәк. Һеҙгә һаулыҡ теләйем.

МӘҠӘЛДӘР

Ҡул ҡайҙа, ауыҙ шунда.
Баш һау булһа, бүрек табылыр.
Ҡул эшләй, ауыҙ маҡтана.
Башың ауыртһа – яулыҡ эсендә, беләгең ауыртһа – ең эсендә (булһын).
Кеше нәҫеле менән оло булмаҫ, һөнәре менән оло булыр.

МИНЕҢ ҒАИЛӘМ. МОЯ СЕМЬЯ.

ҺҮҘҘӘР

ағай – брат, апай – сестра
атай – папа, әсәй – мама
ата-әсә – родители
бабай – дядя, инәй – тетя
бала – ребенок
ғаилә – семья, ғаилә ағзаһы – член семьи
ғүмер – жизнь
еҙнә – муж старшей сестры
ейән – внук, ейәнсәр – внучка
еңгә – жена старшего брата
ир-ат – мужчина, ҡатын-ҡыҙ – женщина
кейәү – муж сестренки, дочери; зять
килен – сноха, невестка
ҡәйнә – свекровь, теща
ҡайны – свекорь, тесть
ҡартатай – дедушка (со стороны папы)
ҡартәсәй – бабушка (со стороны папы)
ҡусты – младший брат
ҡыҙ – дочь, ул – сын
өй – дом, жилище
олатай – дедушка (со стороны мамы)
өләсәй – бабушка (со стороны мамы)
өмөт – надежда
туған(дар) – родственник(и)
шәжәрә – родословная
һеңле – сестренка
һөнәр – профессия
ял –отдых, выходной

бәләкәй – маленький(ая)
иғтибарлы – внимательный(ая)
ихтирамлы – уважительный(ая)
кесе – младший
күңелле – веселый, весело
мөһим – важный
оло – старший
татыу – дружный(ая)
тәрбиәле – воспитанный(ая)
үҙ-ара – взаимный; между собой
хаҡлы – законный
яҡты – светлый(ая)

аҙ – мало
берҙәм – вместе
иҫән-һау – благополучно
йыш ҡына – часто
йыраҡ, алыҫ – далеко
күп – много
һирәк – редко

аралашырға – общаться
ғорурланырға – гордиться
ихтирам итергә – уважать
иларға – плакать
йоҡларға – спать
йәшәргә – жить
көтөргә – ждать
ҡунаҡ итергә – гостить, угощать
осрашырға – встретиться
өмөт итергә – надеяться
төҙөргә – строить, составлять
тыңларға – слушать
тырышырға – стараться
тыуырға – родиться
уйнарға – играть
үткәрергә – проводить
үҫтерергә – воспитывать
һағынырға – скучать
эйә булыу – владеть
эшләргә – делать, работать
ял итергә – отдыхать
яратырға – любить
ярҙам итергә – помогать

минеке – мой
һинеке – твой
уныҡы – его, ее
беҙҙеке – наш
һеҙҙеке – ваш
уларҙыҡы – их
нисек – как
шуныһы – вот это
үҙең генә – только сам
минеңсә – по-моему

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Ҙур ғаилә, бәләкәй ғаилә, татыу ғаилә, бер туған, ике туған, тәрбиәле бала, ололарҙы ихтирам итеү, бала тыуыуы, ғаилә төҙөү, үҙ-ара аралашыу, һөнәр эйәһе, ғаилә ағзаһы.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Мин ҙур һәм татыу ғаиләлә йәшәйем.
Минең әсәйем,…,…,… бар.
Ә һинең ғаиләң ниндәй?
Ғаилә ағзаларын ихтирам итергә кәрәк.
Ағайым һәм апайым менән ғорурланам.

Мин ололарҙы һәр саҡ тыңлайым.
Һеңлем менән яҡшы аралашабыҙ.
Бала – ата-әсәнең яҡты өмөтө.
Олатайым йоҡларға ярата.
Был машина беҙҙең ғаиләнеке.

Туғандар менән дуҫ йәшәргә тырышалар.
Йыраҡта йәшәгән апайым менән һирәк осрашабыҙ.
Бәләкәй балалар йыш илай.
Баланы иғтибар менән тәрбиәләргә кәрәк.
Өләсәй ейәндәрен көтә.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Әлиә!
– Сәләм, Артур!
– Һин ял көнө нимә эшләйһең?
– Ғаиләбеҙ менән паркка ял итергә барабыҙ.
– Яҡшы. Ғаиләгеҙ ҙурмы?
– Эйе, ете кеше. Мин – өсөнсө бала.
– Ағайың менән апайың бармы?
– Юҡ, ике апайым, ата-әсәйем, олатай-өләсәйем бар.
– Һеҙгә күңелле.Ә беҙҙең ғаиләлә кеше аҙ.
– Нисә кеше?
– Өс. Әсәйем, атайым һәм мин.
– Аҙ булһа ла, берҙәм булығыҙ. Шуныһы мөһим.
– Эйе. Рәхмәт. Ярай, хушлашайыҡ. Һау бул.
– Һау бул! Уңышлы ял һеҙгә!

– Һаумы!
– Һаумы! Ҡайҙа бараһың?
– Өләсәйем ҡунаҡ итәм, ти.
– Үҙең генәме?
– Юҡ, әсәйем менән һеңлем дә бара.
– Күңелле ял итегеҙ. Осрашҡанға тиклем.
– Рәхмәт. Һау бул.

– Һаумы, Ринат!
– Һаумыһығыҙ, Әлфиә апай!
– Был кем, ҡустыңмы? Исеме нисек?
– Эйе, Айҙар – ғаиләбеҙҙә иң кесеһе.
– Уға нисә йәш? Өсмө?
– Өс йәш түгел, ике йәш.
– Һине тыңлаймы? Әллә йыш илаймы?
– Юҡ, иламай, беҙ гел бергә уйнайбыҙ.
– Йоҡларға яратамы?
– Эйе, әсәйем уны йырлап йоҡлата.
– Ярай, иҫән-һау йөрөгөҙ.
– Рәхмәт. Һеҙгә лә яҡшы көн теләйем.
– Һау булығыҙ.

ТЕКСТ

Мин ҙур һәм татыу ғаиләлә йәшәйем. Минең атайым, әсәйем, өләсәйем, олатайым, апайым, ҡустым бар. Ата-әсәйем – мөһим һөнәр эйәләре, өләсәйем менән олатайым хаҡлы ялда. Апайым университетта, ҡустым беренсе класта уҡый. Беҙ үҙ-ара ихтирам менән аралашабыҙ. Ял көндәрен бергә күңелле үткәрәбеҙ. Туғандар менән дә дуҫ йәшәйбеҙ. Ике туған ағайым беҙгә йыш ҡунаҡҡа килә. Әсәйемдең ағаһының ҡыҙы ул. Минеңсә, ғаиләләр татыу булырға, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәргә тейеш. Киләсәктә шәжәрә ағасын төҙөргә теләгем бар.

МӘҠӘЛДӘР

Татыу ғаилә – ил күрке.
Ағаһын күреп, ҡусты үҫер, апаһын күреп, һеңле үҫер.
Әсәй ҡамсыһы мамыҡтан, атай һүҙе тимерҙән.

Ата менән әсә – алтын ҡанат.
Ата-бабам баҡҡан ер – кендек ҡаным аҡҡан ер.

МӘКТӘБЕМ. МОЯ ШКОЛА.

ҺҮҘҘӘР

ай – месяц
алды – перед
ашхана – столовая
баһа – оценка
белем – знание
бина – здание
ваҡыт – время
дәрес – урок
дәреслек – учебник
дәфтәр – тетрадь
ишек – дверь
ихата – двор
йыл – год
көндәлек – дневник
китап – книга
китапхана – библиотека
кәштә – полка
күнегеү – упражнение
ҡабатлау – повторение
ҡат – этаж
ҡағиҙә – правило

ҡыңғырау – звонок
ҡәләм – карандаш
майҙан – площадка
миҫал – пример
мәктәп – школа
сәғәт – часы, время
сәхнә – сцена
таҡта – доска
тамаша залы – актовый зал
тәҙрә – окно
урын – место
уҡытыусы – учитель
уҡыусы – ученик(ца)
усаҡ – костер
хата – ошибка
һорау – вопрос
һуҡмаҡ – тропа
эш – работа
әсбап – пособие
янында – рядом

белемле – образованный
иркен – просторный
ҡатмарлы – сложный
насар – плохой
тырыш – старательный
тәртипле – воспитанный
төрлө – разные
уңышлы – успешный
хөрмәтле – уважаемый(ая)
һәйбәт – хорошо, хороший
һуңғы – последний
яҡты – светлый

бөгөн – сегодня
иртәгә – завтра
кисә – вчера

алырға – получать
ашығырға – торопиться
баҫып торорға – стоять
белем алырға – получать знания
белергә – знать
борсолорға – расстраиваться
күрһәтергә – показать
ҡала – остается
ҡуйырға – ставить, поставить
ойоштророрға – организовать
осратырға – встретить
планлаштырырға – планировать
сығыш яһарға – выступать
сисергә – решать что-то
төҙәтергә – исправлять
тултырырға – заполнять
тырышырға – стараться
уҡырға – учиться, читать
ултырырға – сидеть
үткәрергә – проводить
әҙерләнергә – готовиться к чему-либо
әҙерләргә – готовить что-то
яҙырға – писать
ярышырға – соревноваться

бөтә – все
унда – там
һәр – каждый

зинһар – пожалуйста
иң – самый
һәм – и
шулай уҡ – так же

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Белем көнө, мәктәп уҡыусылары, уҡыусы көндәлеге, яҡшы баһа, насар баһа, хөрмәтле уҡытыусы, белемле уҡыусы, доклад әҙерләргә, семинарға әҙерләнергә, сәхнәлә сығыш яһарға, уҡырға ваҡыт, һуңғы ҡыңғырау, миҫал сисергә, көндәлек тултыра, китапханала ултыра, мәктәп ишеге, мәктәп алды.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Мәктәп – белем усағы.
Минең ҡустым ҙур һәм матур мәктәптә белем ала.
Беҙҙең мәктәп бинаһы дүрт ҡатлы.
Башҡорт теле кабинеты яҡты һәм ҙур.
Бөгөн ағайым һуңғы ҡыңғырауға китте.
Дуҫым менән бергә беҙ класта иң тәртипле уҡыусылар.
Класташым мине ашхана янында осратты.
Яҡшы уҡырға теләгән уҡыусы китапхананы ярата.
Насар баһа алһам, әсәйем борсола.
Апайым университетта һәйбәт уҡый, шуға иртәгә семинарҙа сығыш яһай.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм!
– Сәләм!
– Азат, ҡайҙа ашығаһың?
– Дәрескә. Доклад менән сығыш яһарға кәрәк.
– Әҙерләндеңме?
– Эйе, презентацияны ла әҙерләнем.
– Ярай, уңышлы сығыш һиңә.
– Рәхмәт, Ринат. Осрашҡанға тиклем!
– Хуш!

– Һаумыһығыҙ, Зөлфиә Зөфәровна.
– Һаумы, Айнур. Ниндәй һорау менән килдең?
– Кисә эшләгән эшемдең хаталарын төҙәтергә килдем. Ярҙам итегеҙ әле.
– Әйҙә, төҙәтәйек. Ултыр.
– Рәхмәт, Зөлфиә Зөфәровна.
– Ярай, ҡағиҙәне ҡабатла. Тырышып уҡы.
– Һау булығыҙ.
– Һау бул.

ТЕКСТ

Мин – Дамир, 5-се класс уҡыусыһы. Өфө ҡалаһының 15-се мәктәбендә белем алам. Беҙҙең мәктәп ҙур, дүрт ҡатлы. Бөтә кабинеттар ҙа яҡты, иркен. Шулай уҡ мәктәп бинаһында спорт залы, тамаша залы, ашхана һәм китапхана бар. Минең иң яратҡан урыным – китапхана һәм спорт залы.

Мәктәп ихатаһында ҙур спорт майҙаны бар. Унда беҙ төрлө спорт уйындарын уйнайбыҙ, ярыштар ойошторабыҙ.

Беҙҙең мәктәптә юғары квалификациялы ихтирамлы уҡытыусылар эшләй. Минең яратҡан дәресем – математика. Миңә ҡатмарлы миҫалдар сисергә оҡшай.Уҡытыусылар беҙгә ныҡлы белем бирә. Беҙгә тырышып белем алырға ғына ҡала.

МӘҠӘЛДӘР

Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау – ғәйеп.
Белем – энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең йөрәге тыныс.
Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
Уҡыу – белем шишмәһе.
Аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә, мул төшә.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән, байлыҡтың ҡәҙере йомартлыҡ менән.
Аҡыллы кеше алдамаҫ та, алдатмаҫ та.

УЙЫНСЫҠТАРЫМ, ДУҪТАРЫМ МЕНӘН УЙНАЙЫМ. ИГРАЮ С ДРУЗЬЯМИ, ИГРУШКАМИ.

ҺҮҘҘӘР

ат – лошадь, лошадка
бүләк – подарок
гөлләмә – букет
зыян – вред
йәй – лето
кейем – одежда
күрше – сосед
күлдәк – платье
күстәнәс – гостинцы
көҙ – осень
ҡом – песок
ҡунаҡ – гость
ҡурсаҡ – кукла
ҡыш – зима
майҙансыҡ – площадка
өй – дом
өҫтәл – стол

сана – сани
саңғы – лыжи
сәскә – цветок
тауыш – голос, звук
тыуған көн – день рождения
уйын – игра
уйынсыҡ – игрушка
урам – улица
табын – застолье
тау – гора
туп – мяч
һыу – вода
яҙ – весна
ял – отдых
ярыш – соревнование

аҡ – белый
зәңгәр – синий
йәшел – зеленый
күк – голубой
күңелле – веселый, весело
күңелһеҙ – грустный, грустно
ҡара – черный
ҡыҙыл – красный
мул – богатый, обильный
төҫлө – цветной
төрлө – разный
тулы – полный
тәмле – вкусный
файҙалы – полезный
һары – желтый
һоро – коричневый
яңы – новый

бәрергә – кидать
инергә, керергә – заходить
йыйырға – собирать
ҡалдырырға – оставить
ҡорорға – накрывать
ҡотларға – поздравлять
ҡыҙынырға – загорать
саҡырырға – звать
сығырға – выходить
сабырға – скакать
тегергә – шить
уйнарға – играть
һатып алырға – купить
һатырға – продавать
һыу инергә – купаться
шыуырға – кататься
ял итергә – отдыхать
ятырға – лежать

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Минең уйынсыҡтарым, уйынсыҡтар магазины, дуҫым менән уйнайым, бергә уйнайыҡ, уйын эш түгел, йәй көнө, ҡыш көнө, ваҡытты күңелле үткәреү, тулы мул табын, ҡунаҡҡа саҡырҙы, магазиндан һатып алды, минең исемдән ҡотлағыҙ.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Әсәйем миңә матур уйынсыҡтар һатып алды.
Һинең ҡурсаҡтарың ниндәй?
Апайым минең ҡурсағыма кейем текте.
Йәй көнө дуҫтарым менән ваҡытты күңелле үткәрҙем.
Күрше малай менән бергә дуҫыма ҡунаҡҡа барҙыҡ.

Ҡунаҡтар миңә яңы уйынсыҡтар, тәмле күстәнәстәр алып килгән.
Атайым урамға уйнарға сығырға саҡырҙы.
Айҙарға ағаһы яңы футбол тубы бүләк иткән.
Мин йәй көнө һыу инергә, ҡыш көнө сана шыуырға яратам.
Атайым әсәйемдең тыуған көнөнә матур гөлләмә бүләк итте.
Балалар майҙансығында малайҙар һәм ҡыҙҙар ҡом менән уйнайҙар.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм!
– Сәләм! Мин һиңә ҡунаҡҡа килдем.
– Әйҙә, ин. Тәмле күстәнәстәрең менән сәй эсеп алайыҡ.
– Рәхмәт. Компьютерҙа уйнайыҡмы?
– Юҡ. Компьютерҙа оҙаҡ уйнарға ярамай, зыян килтерә. Кроссворд сисәйек.
– Ооо! Һин күп нәмә беләһең икән.
– Эйе. Мин күп уҡыйым бит.
– Афарин! Миңә лә күберәк уҡырға кәрәк.
– Әлбиттә. Китапханаға бергә барайыҡ.
– Ярай, һөйләштек.

– Һаумы, Әлиә.
– Һаумыһығыҙ, Рәсимә апай.
– Кисә һеҙгә кем килде?
– Ҡунаҡтар. Ҡустымдың тыуған көнө булды.
– Нимәләр бүләк иттеләр? Уйынсыҡтармы?
– Матур ҙур ат, ике машина, кейем алып килделәр.
– Оҡшанымы?
– Эйе, ҡустым да, ҡунаҡтар ҙа шатланды, күңелле булды.
– Ярай, яҡшы булған. Ҡустыңды минең исемдән дә ҡотла.
Аҡыллы, уңышлы малай булып үҫһен.
– Рәхмәт, Рәсимә апай. Һау булығыҙ.
– Һау бул.

ТЕКСТ

Минең яраткан уйынсығым

Һәр баланың яратҡан уйынсығы һәм уйыны бар. Минеке – ҙур йәшел машина. Уны миңә атайым тыуған көнөмә бүләк итте. Мин машинам менән бер үҙем йәки дуҫтарым менән уйнайым. Әсәйем уны һаҡлап ҡына уйнарға ҡушты, сөнки минән һуң ҡустым бар. Уға ла уйнарға ҡалдырырға кәрәк. Яратҡан уйындарым күп. Күберәк мин урамда уйнайым. Сөнки саф һауала уйнау файҙалы. Мин йәй көнө һыу инергә, ҡыш көнө сана шыуырға яратам. Дуҫтарым күп. Улар менән тағы ла күңеллерәк.

Һәр баланың яратҡан уйынсығы һәм уйыны бар. Минеке – ҙур матур ҡурсаҡ. Уны миңә әсәйем тыуған көнөмә бүләк итте. Мин ҡурсағым менән бер үҙем йә дуҫтарым менән уйнайым. Апайым минең ҡурсағыма кейем текте. Әсәйем уны һаҡлап ҡына уйнарға ҡушты, сөнки минән һуң һеңлем бар. Уға ла уйнарға ҡалдырырға кәрәк. Яратҡан уйындарым күп. Күберәк мин урамда уйнайым. Сөнки саф һауала уйнау файҙалы. Мин йәй көнө һыу инергә, ҡыш көнө сана шыуырға яратам. Дуҫтарым күп. Улар менән тағы ла күңеллерәк.

АҘЫҠ-ТҮЛЕК. ҺАУЫТ-ҺАБА. ПРОДУКТЫ ПИТАНИЯ. ПОСУДА.

ҺҮҘҘӘР

азыҡ – еда
аҙыҡ-түлек – продукты
аш – суп
бал – мед
балыҡ – рыба
бәлеш – пирог
борос – перец
бутҡа – каша
икмәк – хлеб
иртәнге аш – завтрак
ит – мясо
картуф – картофель
киске аш – ужин
киҫәк – кусок
күстәнәс – гостинец
ҡаймаҡ – сметана
ҡарағат – смородина
ҡоймаҡ – блины
ҡорот – курут
ҡурай еләге – малина
ҡымыҙ – кумыс
мәтрүшкә – душица
сәй – чай
сәк-сәк – чак-чак
тоҙ – соль
төшкө аш – обед
тәмләткес – приправа
үҫемлек майы – растительное масло
һурпа – бульон
һөт – молоко
һут – сок
шәкәр – сахар
эремсек – творог
эсемлек – напиток
эфлисун – апельсин
балғалаҡ – чайная ложка
бысаҡ – нож
ҡалаҡ – ложка
сәнске – вилка
сынаяҡ – чашка
таба – сковорода
кәстрүл – кастрюля
самауыр – самовар
тәрилкә – тарелка
һауыт-һаба – посуда
бай – богатый
таҙа – чистый
тәмле – вкусный
тәрән – глубокий
тоҙло – соленый
тулы – полный
үткер – острый
һай – неглубокий
һутлы – сочный
эҫе – горячий
витаминлы – витаминный
бик – очень
тейеш – должен, обязан
тураһында – о, об, обо, про
әйҙә – давай
алып килергә – принести
ашарға – есть, кушать
бешерергә – готовить
бешергә – обжечься
йыуырға – мыть
ҡайнатырға – кипятить
ҡойорға – наливать
(ҡоймаҡ ҡойорға – печь блины)
өҫтәргә – добавить
тәмләргә – пробовать на вкус
һалырға – класть
һатып алырға – покупать
телергә – резать на куски
түгергә – проливать
туҡланырға – питаться
эсергә – пить

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Ашығыҙ тәмле булһын, өҫтәлегеҙ тулы булһын, тәмле бешерә, меню төҙөү, ҡоймаҡ ҡоя, икмәк бешерә, бал менән сәй эсәм, киске ашҡа саҡырҙылар, ашҡа тоҙ өҫтә әле, һауыт-һабаны йыуырға кәрәк, бысаҡ менән телеү, үткер бысаҡ, тулы кәстрүл, тәрән тәрилкә.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Беҙ төшкө аш ашайбыҙ.
Әсәйем тәмле аш бешерҙе.
Мин ашты ҡорот менән ашарға яратам.
Һеңлем икмәкте май менән генә ашай.
Ҡоймаҡты өләсәйем ҡойҙо.
Өләсәйҙәр сәйҙе бал менән эсәләр.
Атайым тортты бысаҡ менән алты киҫәккә телде.
Ашты ҡалаҡ менән ашайҙар.
Өләсәйем күстәнәскә кәнфит менән бәлеш алып килгән.
Әфлисун һуты бик файҙалы, витаминлы.
Сынаяҡтағы сәй эҫе, түгеп ҡуйма, бешерһең.
Һауыт-һаба һәр саҡ таҙа булырға тейеш.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Әлиә!
– Һаумы, Илдар!
– Беҙгә ҡунаҡҡа кил бөгөн. Минең тыуған көнөмә.
– Нимә алып киләйем сәйгә?
– Сәк-сәк алып кил, өләсәйемә күстәнәс булыр. Ул сәк-сәк менән сәй эсергә ярата.
– Ярай. Хәҙер килеп етәм.
– Көтәм.

– Һаумы, Эльвира.
– Ооо, һаумы, Юлиә.
– Ҡайҙа бараһың?
– Һауыт-һаба магазинына, әсәйемә бүләк алырға кәрәк.
– Мин дә һиңә ярҙам итәйем әле?
– Әйҙә. Бына ошо матур сәйнүк миңә оҡшай, ул сәй эсергә ярата бит.
– Ә бына был сәскәле сынаяҡтар ниндәй матур, мин һатып алам. Бергәләп тәмлекәстәр менән сәй эсербеҙ.
– Кисен беҙгә инерһең. Осрашҡанға тиклем!
– Хуш!

ТЕКСТ

Яратҡан аш-һыуым.

Һәр кешенең яратҡан аҙығы бар. Мин башҡорт аш-һыуҙарын яратам. Сөнки улар тәмле лә, файҙалы ла. Һөттән эшләнгән ҡорот, эремсек, ҡатыҡ, ҡаймаҡ тәбиғи витаминдарға бай. Уларҙы балалар көн дә ашаһа, эс ауырыуҙары булмаясаҡ.

Мул ит һалып бешерелгән һурпаның файҙаһы тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Ҡоро тәм-томдарға ҡарағанда аш, әлбиттә, витаминдарға бай. Ә сәйҙе башҡорттар бал менән эскәндәр. Сәйгә төрлө дарыу үләндәрен, япраҡтар, сәскәләр ҡайнатҡандар. Әле лә был йола бар. Әсәйем сәйгә ҡарағат, ҡурай еләге япраҡтарын, мәтрүшкә сәскәләрен һала.

Иң файҙалы эсемлек – ҡымыҙ. Атайым ҡымыҙҙы ауылдан алып ҡайта. Һау булам тиһәгеҙ, тик файҙалы аҙыҡ менән туҡланырға кәрәк.

МӘҠӘЛДӘР

Аш атҡанға таш атма.
Ашағанда аҙ яҡшы, эшләгәндә күп яҡшы.
Аштан оло булма.
Ашағанда телһеҙ бул, эшләгәндә өнһөҙ бул.
Аҙыҡ мул ерҙә ауырыу булмаҫ.
Аҙыҡлы ат арымаҫ, дағалы ат таймаҫ.

КЕЙЕМ-ҺАЛЫМ. ОДЕЖДА.

ҺҮҘҘӘР

алъяпҡыс – фартук
аяҡ кейеме – обувь
балалар кейеме – детская одежда
бүрек – зимняя шапка
балаҡ – штанина
башлыҡ – головной убор
бейәләй – варежки
быйма – валенки
ең – рукав
еләп – халат
ир-ат кейеме – мужская одежда
итәк – подол
итек – сапоги
камзул – камзол
кейем-һалым – одежда
күлдәк – платье
ҡатын-ҡыҙ кейеме – женская одежда
мамыҡ – пух
ойоҡ – носки
өҫ кейеме – верхняя одежда
рух – дух
салбар – брюки
ситек – кожаные сапоги
таҫтамал – полотенце

тун – шуба
түбәтәй – тюбетейка
үҙаң – самосознание
үлсәм – размер
үтек – утюг
шәл – шаль
эске кейем – бельё
әйбер – вещь
яға – воротник
яулыҡ – платок
ҡушъяулыҡ – двойной платок башкирок
ямау – заплатка

биҙәлгән – украшенный
бәйләнгән – вязаный
бөхтә – опрятный
ебәк – шелковый
еңел – легкий
иҫке, иҫкергән – старый
йылы – теплый
йоҡа – тонкий
йөн – шерстяной
йәйге – летний
киң – широкий
кейелмәгән – неношеный
ҡыҫҡа – короткий
ҡышҡы – зимний
милли – национальный
оҙон – длинный
сигелгән – вышитый
ситса – ситцевый
сыбар – пестрый
үтекләнгән – глаженый
таман – как раз, впору
туҙған – потрепаный
тәпәш – низкий
уңайлы – удобный
яңы – новый
ямалған – подшитый

биҙәргә – украшать
бәйләргә – вязать
кейендереү – одевать кого-либо
килешеү – идти, быть к лицу, подходить
оҡшай – нравится
сисенергә – раздеваться
сисендерергә – раздевать
сигергә – вышивать
туҙҙырырға – потрепать
тегергә – шить
таҫларға – складывать
үтекләргә – гладить
һайларға – выбирать

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Кейем үлсәме, яңы кейем, иҫке кейем, модалы кейем, әйбер үтекләү, үтекләнгән салбар, сигелгән яулыҡ, оҙон еңле күлдәк, матур йәйге кейем, ауыр ҡышҡы тун, күлдәктең итәге биҙәлгән, йоҡа аяҡ кейеме, сигелгән алъяпҡыс, кейемде таҫлайым, йөн ойоҡ, ҡустымды сисендерәм, һеңлемде кейендерәм, күлдәгем миңә таман, кофтаң килешә.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Минең матур күлдәгем бар.
Кейем магазинында уңайлы салбар һатыла.
Әсәйем бейәләй бәйләне.
Өләсәйемә мамыҡ шәл бүләк иттем.
Ҡустым кейемде тиҙ туҙҙыра.

Был ебәк күлдәк апайыма килешә.
Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары күлдәгенең итәге биҙәлгән була.
Хәҙер милли кейем модала.
Балалар тәҫлө, сыбар кейем кейергә ярата.
Аяҡ кейеме уңайлы булырға тейеш.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Гүзәл!
– Сәләм, Гөлшат!
– Яңы күлдәк алдыңмы әллә?
– Эйе, яңы, тик уны әсәйем бүләк итте.
– Матур. Миңә лә еңе оҙон, итәге киң күлдәк кәрәк ине.
– «Модалы кейем» магазинында төрлөләре бар. Барып ҡара.
– Ярай, рәхмәт. Күлдәгең килешеп тора.
– Рәхмәт. Осрашҡанға тиклем. Хуш.
– Һау бул.

– Һаумыһығыҙ!
– Һаумыһығыҙ. Нимә менән ярҙам итә алам?
– Минең ейәнемә матур ғына кейем комплекты бүләк иткем килә.
– Бына ошо йәшел салбар менән джемперҙы ҡарағыҙ. Ниндәй үлсәм кәрәк?
– Эйе, матур. 104 см үлсәме ярарға тейеш.
– Ә бына быныһы һоро төҫтә. Һайлағыҙ.
– Йәшел төҫтө ярата ейәнем. Шуны бирегеҙ.
– Һатып алыуығыҙ өсөн рәхмәт. Иҫән-һау кейеп үҫһен.
– Рәхмәт. Һау булығыҙ.

ТЕКСТ

Кешене кейеменә ҡарап ҡаршы алалар. Шуның өсөн ҡайҙа ғына барһаң да матур, итәғәтле итеп кейенергә кәрәк.

Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәк, йәки ҡыҫҡа булмаған итәк кейергә тейеш. Аяҡ кейеме уңайлы, тәпәш каблуклы булһа ла ярай. Ҡыҙҙарға салбар кейеү килешмәй. Һирәк, юлда уңайлы булһын өсөн генә кейәләр.

Ир-егеттәр күлдәк, салбар, кәрәк саҡта пиджак кейеп йөрөй ала. Һәр кемдең кейеме таҙа һәм бөхтә булырға тейеш. Кейемде һаҡлау ҡағиҙәләрен үтәү мотлаҡ.

Байрамдарҙа милли кейем кейеүҙе матур йолаға әйләндерергә кәрәк. Милли кейем беҙҙең милли үҙаңды, рухты үҫтерә.

МӘҠӘЛДӘР

Кейеменә ҡарап ҡаршылайҙар, аҡылына ҡарап оҙаталар.
Кейем ҡараһы китер, күңел ҡараһы китмәҫ.
Итәк киҫеп, ең булмаҫ, иҫке дошман дуҫ булмаҫ.
Итексенең итеге булмаҫ, балтасының ишеге булмаҫ.
Итеге тайыш булһа ла йөрәге тайыш булмаһын.

ТӘБИҒӘТ. ЙЫЛ МИҘГЕЛДӘРЕ. ПРИРОДА. ВРЕМЕНА ГОДА.

ҺҮҘҘӘР

ағас – дерево
аҡлан – поляна
балыҡ – рыба
баҫыу, ялан – поле
бесән – сено
болон, туғай – луг
бөжәк – насекомое
ер – земля
йылға – река
йәнлек – зверь
күк – небо
күл – озеро
ҡарағай – сосна
ҡайын – береза
ҡош – птица
нур – луч
орлоҡ – семена
оя – гнездо
сәскә, гөл – цветок
тау – гора
тауыш – звук
тереклек – жизнь,существование
тупраҡ – земля, почва
тәбиғәт – природа
урман – лес
үлән – трава
үҫемлек – растение

шарлауыҡ – водопад
аҙна – неделя
ай – месяц, луна
боҙбармаҡ – сосулька
ботаҡ – ветка
ел – ветер
зыян – вред
имән – дуб
йәй – лето
йыл – год
йәшен – молния
көҙ – осень
көн – день
ҡыш – зима
ҡар – снег
ҡояш – солнце
миҙгел – время года
төн – ночь
тәүлек – сутки
һауа – воздух
һыу – вода
шишмә – родник, ключ
яҙ – весна
ямғыр – дождь
япраҡ – лист
яр – берег
тағараҡ – кормушка

ҡалын – толстый
бейек – высокий
ҡуйы – густой
иҫ киткес – удивительный
ҡырағай – дикий
киң – широкий
ҡыҫҡа – короткий
көслө – сильный
ҡышлаусы – зимующий
күсер – перелетные
ҡараңғы – темный
ҡойма – проливной
ҡояшлы – солнечный
оҙон – длинный
тар – узкий
текә – крутой
тәрән – глубокий
тулы һыулы – полноводный
файҙалы – полезный
һай – мелководный
һалҡын – холодный, прохладный
һуңғы – последний
һыуыҡ – морозный
ыжғыр – пронзительный
эҫе – жаркий
яҡты – светлый

аға – течёт
башлана – начинается
ирергә – таять
иҫергә – дуть (ветер)
килергә – приходить, наступать
килтерергә – приносить
күтәрелергә – подниматься
ҡойола – осыпается, падает
ҡорорға – строить (гнездо)
ҡунырға – перелетать (с цветка на цветок)
ҡышларға – зимовать
йәшнәргә – сверкать (молния)
йылынырға – греться
оҡшарға – нравиться
осорға – летать
тамырға – капать
ташырға – разливаться
туҡланырға – питаться
үҫергә – расти
шауларға – шуметь
әҙерләргә – готовить
әҙерләнергә – готовиться
яуырға – идти (дождь, снег)

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Ҡояш нуры, бай тәбиғәт, күсер ҡоштар, ҡышлаусы ҡоштар, тәрән күл, тулы һыулы йылға, текә яр, дүрт миҙгел, ҡоштар ҡышҡа әҙерләнәләр, урман шаулай, урманда ҡош тауыштары, бөжәктәр сәскәнән сәскәгә ҡунып оса, ыжғыр бурандар, һуңғы ҡар, үҫемлектәр үҫә, йылға яҙын таша, йәшен йәшнәй, ҡараңғы урман, ҡоштар оя ҡоралар, яҙ башында ирей, эҫе йәй, сәскәле яландар, йылға болонға ташҡан, саф һауа.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Тәбиғәткә зыян килтерергә ярамай.
Кеше – тәбиғәт балаһы.
Бөжәктәр ҡояш нурында йылыналар.
Урманда аҡ ҡайындар, ҡарт имәндәр үҫә.
Шишмәнең һыуы һалҡын, таҙа була.
Ағайым менән ҡоштарға тағараҡтар эшләнек.
Күсер ҡоштар йылы яҡтарға осалар.
Заводтар саф һауаны бысраталар, тәбиғәткә зыян килтерәләр.
Ҡышын йәнлектәргә урмансылар бесән, ем ашаталар.
Миңә яҙ миҙгеле оҡшай, сөнки яҙын тәбиғәт уяна, яңынан тыуа.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
– Һаумыһығыҙ, Асия Әнүәровна!
– Беҙ һеҙҙең менән бөгөн тәбиғәткә экскурсияға барабыҙ.
– Яҡшы. Унда үҙеңде нисек тоторға кәрәк?
– Беҙ – тәбиғәт балалары. Үҙегеҙҙе нисек яратаһығыҙ, уны ла шулай ихтирам итергә кәрәк. Ҡоштар, йәнлектәр, бар тереклек – беҙҙең дуҫтар.
– Сүп-сар ташларға ярамай, тине атайым. Сүп тәбиғәткә зыян килтерә.
– Дөрөҫ, Марат, ағас ботаҡтарын һындырмайбыҙ.
– Асия Әнүәровна, әйҙәгеҙ, киттек.
– Әйҙәгеҙ.

– Сәләм, Айнур!
– Сәләм, Камила!
– Ҡайҙа китеп бараһың?
– Мәктәптә «Ағас оҫтаһы» түңәрәге башлана. Шунда ашығам.
– Ооо, унда нимә эшләйһегеҙ?
– Ҡоштарға тағараҡтар, сыйырсыҡ оялары яһайбыҙ. Тиҙҙән ҡыш етә, ҡоштарға ярҙам итергә кәрәк.
– Минең дә һинең менән барғым килә. Рөхсәт ит әле, зинһар.
– Әйҙә.
– Һеҙ тағараҡ эшләгәс, беҙ ҡыҙҙар менән ағастарға элеп ҡуйырбыҙ, ем һалырбыҙ.
– Ана, турғайҙар ишетеп ҡалдылар ҙа шатланалар.
– Эйе, беҙ изге эш башлайбыҙ бит.

ТЕКСТ

Беҙ бай тәбиғәтле матур ерҙә йәшәйбеҙ. Башҡортостан тәбиғәтен Швейцария менән сағыштыралар. Иҫ китмәле ҡуйы, төрлө йәнлектәргә бай урмандар, тулы һыулы йылғалар, тәрән, балыҡҡа бай күлдәр бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Бейек тауҙарҙың бөйөклөгө күптәрҙе ымһындыра. Шуның өсөн Башҡортостанда туризм йылдан-йыл үҫә. Сит ил кешеләре беҙҙең тәбиғәткә ғашиҡ булып ҡайталар.

Әммәеребеҙгә зыян килтереүселәр ҙә байтаҡ. Урмандар ҡырҡыла, йылға-күлдәр кибә. Ялан һәм туғайҙар сүп-сар менән тула. Саф һауа ҡара төтөн менән бысратыла.

Тыуған еребеҙҙе ҡәҙерләйек, һаҡлайыҡ. Һәр кеше, үҙенән башлап башҡаларға миҫал күрһәтһә, киләһе быуындар ҙа беҙҙең матур тәбиғәт менән ғорурланып, уға һоҡланып йәшәйәсәк.

ТЫУҒАН ИЛЕМ – БАШҠОРТОСТАН. ӨФӨ. МОЯ РОДИНА – БАШКОРТОСТАН. УФА.

ҺҮҘҘӘР

атама – название
ауыл – деревня
баҡса – сад
баш ҡала – столица
биләмә – территория
быуат – век
быуын – поколение
ваҡыт – время
Ватан – Родина, Отечество
вәкил – представитель
ғалим – ученый
ғүмер – жизнь
дәүләт – государство
донъя – мир
ил – страна
йорт – здание, дом
көньяҡ – юг
көнбайыш – запад
көнсығыш – восток
көрәшсе – борец
күләм – объем
ҡаҙылма – ископаемое
ҡала – город
ҡаласыҡ – городок
ҡомартҡы – реликвия
ҡәбилә – племя
ҡунаҡхана – гостиница
майҙан – площадь
милләт – нация; национальность
мәҙәниәт – культура
ос – конец
оҫта – мастер
өлкә – область
сәнғәт – искусство
сәнәғәт – промышленность
тарих – история
тикшеренеү – исследование
тирә-яҡ – вокруг
төньяҡ – север
туҡталыш – остановка
тәьҫорат – впечатление
урам – улица
урын – место
ут – огонь
халыҡ – народ
хеҙмәткәр – служащий
хөрмәт – уважение
һәйкәл – памятник
шағир – поэт
шиғыр – стих
шәхес – личность
эшмәкәр – деятель
юл – дорога
яҙыусы – писатель
боронғо – древний
бөйөк – великий
ғилми – научный
ғорур – гордый
иҫке – старый
күсмә – кочевой
танылған – известный
түбәнге – нижний
тыуған – родной
үҙәк – центральный
үрге – верхний
хәҙерге – сегодняшний, современный
эшсән – трудолюбивый
яңы – новый

һәйбәт – хорошо
элек – раньше

атала – называется
ғорурлана – гордится
иҫәпләнә – считается
йәлеп итергә – привлекать
ҡыҙыҡһынырға – интересоваться
мәшғүл – занят
сәйәхәт итәләр – путешествуют
төшөргән – нарисовал
төшөрөлгән – нарисовано
урата – окружает
урынлашҡан – расположен
һаҡланған – сохранился
һуҙылған – растянулся
һыйларға – угощать

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Тыуған ил, ҡала урамдары, хәҙерге көндә, түбәнге осонда, тарихи шәхестәр, баш ҡалалағы һәйкәл, һәйбәт һаҡланған, күсмә халыҡ, шағир һәм яҙыусылар, көньяҡ далалары, танылған ғалим, ер өсөн көрәшселәр, хөрмәт күрһәтеү, урам уттары, ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәт, яңы урам, матур туҡталыштар, республикам менән ғорурланам, сәнәғәт менән ҡыҙыҡһына, сәнғәт оҫталары, элекке ҡәбиләләр, донъяға билдәле, ҡәбилә биләмәләре, эшсән халыҡ.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Башҡортостан – минең тыуған илем.
Республикала төрлө милләт вәкилдәре йәшәй
Тыуған ерем файҙалы ҡаҙылмаларға бай.
Күккә ашҡан тауҙар, киң йылғалар сәйәхәтселәрҙең иғтибарын йәлеп итә.
Өфө ҡалаһында меңәрләгән ҙур һәм бәләкәй урам бар.
Урамдың асфальт юлдары бер нисә километрға һуҙылған.
Ҡаланың урамдары тарихи шәхестәрҙең исемен йөрөтә.
Өфө ҡалаһында ботаника баҡсаһы бар.
Башҡортостан төньяҡ-көнбайыштан Удмурт Республикаһы менән сиктәш.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Артур!
– Сәләм, Дамир!. Миңә ярҙам ит әле.
– Әйҙә, нимә эшләйбеҙ?
– Миңә Америкалағы дуҫыма хат яҙырға кәрәк. Тыуған еребеҙ тураһында матур итеп, һүрәтләп яҙғым килә.
– Башҡортостан иҫ китмәле матур тәбиғәтле, бай флора һәм фауналы, тип яҙ. Беҙ тәбиғәтебеҙ менән ғорурланабыҙ һәм уны һаҡлайбыҙ. Башҡорт балы ғына ни тора! Беҙҙең еребеҙҙе бөйөк яҙыусы Лев Николаевич Толстой, Антон Павлович Чехов яратҡандар.
– Рәхмәт, Дамир. Дуҫым беҙгә киләм тиһә?
– Килһен, беҙ ҡунаҡсыл халыҡ. Һыйларбыҙ.
– Ярар, хатымды яҙып бөтәм дә, электрон адресына ебәрәм. Рәхмәт, дуҫ.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
– Һаумыһығыҙ, Азат Марат улы!
– Бөгөн дәрестә халыҡ шағиры Мостай Кәримдең «Ҡайын япрағы тураһында» шиғырын уҡыйбыҙ.
– Азат Марат улы, беҙ бер япраҡ саҡлы булһаҡ та Рәсәйҙең йөрәге һымаҡ, тип уйлайым мин.
– Дөрөҫ, Азамат, республиканың сәнәғәте Рәсәй өсөн бик мөһим.
– Талантлы шәхестәребеҙ ҙә күп.
– Эйе, Гөлшат, беҙҙең халыҡ ҙур йөрәкле, ҡунаҡсыл.
– Тик ситтән килгәндәргә еребеҙгә зыян килтерергә бирмәйек.
– Афарин, Элина, илебеҙҙе яҡлайыҡ, һаҡлайыҡ. Ысын патриот булып үҫегеҙ.Тыуған Ер-Әсә берәү генә була.

ТЕКСТ

Өфө – Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы. Ул Ҡариҙел Һәм Дим йылғаларының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, тау башында урынлашҡан. Өфө үҫешкән инфраструктуралы матур ҡала. Бында заманса биналар ҙа, боронғо тарихи ҡоролмалар ҙа етерлек. Һуңғы ваҡытта Өфө халыҡ-ара форумдар, фестивалдәр үҙәге булып тора. Төрлө милләт балаларының үҙ телдәрендә белем алыу мөмкинлеге бар. Мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт өлкәләре лә донъя кимәлендәге талантлы шәхестәр үҫтерә.

Ҡала көндән-көн матурлана, халыҡҡа ял урындары ойошторола. Беҙҙең ҡаланы күрергә теләгән туристар йылдан-йыл арта. Мин баш ҡалабыҙ менән ғорурланам.

Башҡортостан Республикаһы Рәсәйҙең Азия менән Европа сиктәре ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Башҡортостан тәбиғәте иҫ киткес матур. Беҙҙә киң Урал тауҙары, тулы һыулы Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары, тәрән күлдәр, ҡуйы урмандар бар.

Башҡортостанда ябай, эшсән, ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй. Шуның өсөн төрлө милләт вәкилдәре тыныс, дуҫ донъя көтәләр.

Билдәле донъя шәхестәре Башҡортостан тураһында тик ыңғай фекерҙәр генә яҙалар.

Республикам бөтә донъя кимәлендә мөһим булған сәнәғәт өлкәләрендә алдынғылар рәтендә.

Мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт өлкәләре лә донъя кимәлендәге талантлы шәхестәр үҫтерә. Тыуған еребеҙ менән ғорурланып, яҡлап, һаҡлап йәшәйек.

МӘҠӘЛДӘР

Ил тупланһа – туп була, ил ойошһа – уҡ була.

Иле барҙың – көнө бар.

Ерҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.

Иле берҙәмдең көнө берҙәм.

Күл балығы менән данлы, ил халҡы менән данлы.

ХАЙУАНДАР ДОНЪЯҺЫ. ҠОШТАР. ЖИВОТНЫЙ МИР. ПТИЦЫ.

ҺҮҘҘӘР

айыу – медведь
арыҫлан – лев
балыҡ – рыба
бурһыҡ – барсук
бүре – волк
йөн – шерсть
йыртҡыс – хищник
йылан – змея
йәнлек – зверь
ҡурсаулыҡ – заповедник
ҡуян – заяц
маймыл – обезьяна
сабаҡ – плотва, сорошка
суртан – щука
сысҡан – мышь
ташбаҡа – черепаха
тейен – белка
терпе – еж
тире – кожа, шкура
төлкө – лиса
фил – слон
хайуан – животное
һуҫар – куница
шәшке – норка
юлбарыҫ – тигр

ат – конь
айғыр – жеребец
бейә – лошадь, кобыла
бесәй – кошка
быҙау – теленок
бәрәс – ягненок, козленок
көсөк – щенок
кәзә – коза
кәзә тәкәһе – козел
ҡойроҡ – хвост
ҡолон – жеребенок
мамыҡ – пух
морон – нос, морда
оя – гнездо
өң – нора
сусҡа – свинья
сәтләүек – орех, желудь
тәкә – баран
үгеҙ – бык
һарыҡ – овца
һарай – сарай
һөт – молоко
һыйыр – корова
һынамыш – примета
эт – собака

аҡҡош – лебедь
аҡсарлаҡ – чайка
бәпкә – гусенок, утенок
кетәк – птичник
күгәрсен – голубь
кәкүк – кукушка
ҡаҙ – гусь
ҡанат – крыло
ҡарға – ворона, грач
ҡауҙы – аист
ҡоҙғон – ворон
ҡор – тетерев
өйрәк – утка
өкө – сова
себеш – цыпленок
суҡыш – клюв
селән – цапля
сыйырсыҡ – скворец
тауыҡ – курица
турғай – воробей
тумыртҡа – дятел
тәпәй – лапка
һандуғас – соловей
һуйыр – глухарь
әтәс – петух

бал ҡорто – пчела
бөжәк – насекомое
иңкеш – шмель
күбәләк – бабочка
күгәүен – слепень
ҡамҡа – божья коровка
ҡорт, селәү – червь
себен – муха
серәкәй – комар
үрмәксе – паук
һағыҙаҡ – оса
энәғараҡ – стрекоза

ас – голодный
бәләкәй – маленький
етеҙ – быстрый, ловкий
йорт – домашний
йыртҡыс – хищный
ҡырағай – дикий
ҡырыҫ – дикий, суровый
туҡ – сытый
уҫал – злой
яй – медленный

баҡыра – блеет
бирешмәй – выживает
йөҙә – плавает
йоҡоға тала – впадает в спячку
кешнәргә – ржать
күҙләү – высматривать
ҡаңғылдаша – гогочут
ҡармаҡлау – рыбачить
ҡуҙғалырға – двигаться
ҡысҡыра – кричит
ҡытҡылдай – кудахчет
мөңрәй – мычит
олой – воет
оя ҡороу – строить гнездо
рөхсәт итмәй – запрещает
сабыу – скакать
саҡыра – зовет
(кәкүк саҡыра – кукушка кукует)
сумырға – нырять
туҡлана – питается
тыйыла – запрещается
тығырға – засовывать
үкерергә – реветь
һайрай – поет
һауырға – доить
һунар итә – охотится
яра – раскалывает, колет

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Кәкүк саҡыра, һыйыр һауа, бүре олой, эт көсөгө, ҡаҙ тәпәйҙәре, ҡаҙ мамығы, кәзә мамығы, ат арбаһы, ҡолон кешнәй, сабаҡ ҡармаҡланым, төлкө терпене ҡурҡыта, тәкә бүләк иттеләр, аҡҡош оя ҡора, ҡырағай хайуандар, йорт хайуандары, шәшке тун, айыу тиреһе, сәтләүек яра, уҫал бүре, етеҙ сысҡан, ҡырыҫ юлбарыҫ, үгеҙ үкерә, ташбаҡа яй ҡуҙғала, моронон ҡанат аҫтына тыға.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Ҡоштар яҙын йылы яҡтан ҡайталар.
Айыу ҡышын йоҡоға тала.
Яланда аттар саба, ҡолондар кешнәй.
Ҡышын урманда ҡырағай йәнлектәрҙе урмансылар ашата.
Сыйырсыҡтар тағы ла ояларына ҡайттылар.
Һабан турғайҙары яҙға шатлана.
Һандуғастар таң алдынан һайрай башлай.
Башҡортостан йылғалары төрлө балыҡтарға бай.
Күрше апай һауынсы булып эшләй.
«Ҡыҙыл китап»ҡа ингән йәнлектәргә һунар итеү тыйыла.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Айрат!
– Сәләм, Илшат!
– Атайым мине Димгә балыҡҡа алып барам, ти. Бараһыңмы?
– Ооо, барам. Тик минең ҡармағым юҡ.
– Миндә бар. Атайым ем бирәм, тине. Селәү ҡаҙыныҡ.
– Көтәбеҙ.

– Апай, «Ҡыҙыл китап» ни өсөн шулай атала?
– Үткән быуаттың 1948 йылында тәбиғәтте һаҡлау буйынса ойошма барлыҡҡа килгән. Уларҙың документы «Ҡыҙыл китап». Был документҡа юғалыу ҡурҡынысы янаған йәнлектәр, үҫемлектәр исемлеген индергәндәр. Ҡыҙыл төҫ рөхсәт итмәү, һаҡларға кәрәк тигәнде аңлата.
– Әә, шуның өсөн уҡытыусыбыҙ аҡҡоштарҙы атырға ярамай тине.
– Эйе, аҡҡош менән башҡорт халҡының күп һынамыштары бәйле.
– Рәхмәт апай. Мин уларҙы һаҡлармын. Улар – матур ҡоштар.

ТЕКСТ

Башҡортостан Республикаһы территорияһындағы күп кенә йәнлектәр, бөжәктәр һәм үҫемлектәр «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән. Уларҙың юғалыуының сәбәбе төрлө: урмандарҙы ҡырҡыу, янғындар, минераль ашламалар, химикаттар ҡулланыу. Әммә республиканың урман хужалыҡтары үҫемлектәрҙе һәм хайуандарҙы һаҡлауҙа, рациональ файҙаланыуҙа һәм тулыландырыуҙа байтаҡ эштәр эшләй. Ҡурсаулыҡтар булдырыла, ағастар ултыртыла, браконьерҙар менән көрәш алып барыла.

Һәр тере йән был донъяла юҡҡа түгел. Шуның өсөн тәбиғәтте һаҡлау – беҙҙең бурыс.

ҺЫНАМЫШТАР

Аҡҡош иртә килһә, яҙ насар булыр, оҙаҡ торор.
Сыйырсыҡ бала сығарғанда һоло, ҡарабойҙай сәс.
Торна бейеһә, һауа йылыныр.
Ҡаҙ-өйрәктәр ҡарҙа ҡойонһа, көн йылыныр, буран булыуы ихтимал.
Ҡырмыҫҡалар бейек иләү яһаһа – һалҡын ҡышҡа.
Бүҙәнә ҡысҡырһа, бойҙай уңа.

ҺАУЛЫҠ. ЗДОРОВЬЕ.

ҺҮҘҘӘР

азыҡ, ашамлыҡ – еда, пища
бала – ребенок
бәхет – счастье
дарыу – лекарство
дарыухана – аптека
дауа – лечение
дауахана – больница
емеш-еләк – фрукты
йәшелсә – овощи
йүгереү – бег
йөҙөү – плавание
йән – душа
йоҡо – сон
кеше – человек
көн режимы – режим дня
көс – сила
ҡояш – солнце
нигеҙ – основа
нур – луч
сынығыу – закаливание
туҡланыу – питание
тормош – жизнь
тән – тело
һаулыҡ – здоровье
һыу – вода
һауа – воздух
ял – отдых

дөрөҫ – правильный, правильно
еңел – легкий
йыш – частый, часто
көслө – сильный
күп – много
ҡыҙыу – горячий
саф – чистый, свежий
сәләмәт – здоровый
таҙа – чистый
тыныс – спокойный
тәбиғи – натуральный
файҙалы – полезный
һау – здоровый
яҡшы – хороший

барлыҡ – весь, вся, все, все
бөтәһе – все, всё
һәр кем – каждый, всякий

ашаным – поел
дауаланыу – лечиться
йөҙәм – плаваю
йүгерәм – бегаю
йоҡо туйҙырам – высыпаюсь
йыйырға – собирать
йыуынам – умываюсь, моюсь
ҡатнашам – участвую
ҡыҙынам – греюсь, загораю
танып белеү – познавать
туҡланам – питаюсь
тын алам – дышу
һаҡларға – беречь, сохранять
һыу инәм – купаюсь
шөғөлләнәм – занимаюсь
яһайым – делаю
ял итәм – отдыхаю

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Йоҡо туйҙырыу файҙалы, яҡшы ял итеү, дөрөҫ туҡланам, көс йыям, саф һауа менән тын алыу, йәшелсәләр менән туҡланам, һау-сәләмәт тормош, ҡояшта ҡыҙынам, бассейнда йөҙәм, спорт менән шөғөлләнәм.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Сәләмәт тәндә – сәләмәт рух.

Ағайым спорт менән шөғөлләнә.

Беҙҙең ғаилә һау-сәләмәт тормош алып бара.

Ҡустым йүгерергә ярата, ярыштарҙа ҡатнаша.

Дуҫтарым менән йәй буйы һыу индек, сыныҡтырға тырыштыҡ.

Саф һауала йөрөү, ял итеү, дөрөҫ туҡланыу һаулыҡты һаҡлай.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯҺЫ

– Сәләм!

– Һаумы! Хәлдәр нисек?

– Яҡшы. Үҙең нисек? Ҡайҙа бараһың?

– Мин еңел атлетика секцияһында шөғөлләнәм.

– Әәә, оҡшаймы?

– Әлбиттә, йөҙә башлағас, бөтөнләй ауырымайым.

– Әсәйем дә спорт менән шөғөлләнә, ти.

– Әйҙә, беҙҙең секцияла урындар бар. Килерһең. Көтәм.

– Ярар. Шылтыратырмын. Хуш!

– Һау бул!

ТЕКСТ

Сәләмәтлек – кешенең иң ҙур байлығы. Һәр кем үҙенең һаулығы тураһында уйларға тейеш. Беренсенән, ул – дөрөҫ туҡланыу. Ашаған һәр аҙыҡ кеше тәненә файҙа килтерергә тейеш. Икенсенән, спорт менән шөғөлләнеү, көн режимын үтәү. Өсөнсөнән, һәр кем ваҡытында барлыҡ медицина тикшеренеүҙәрен үтеп торорға тейеш. Тик шул осраҡта ғына бөтәһе лә сәләмәт буласаҡ. Сәләмәтлек – кеше бәхетенең нигеҙе. Һаулыҡ булғанда ғына кеше үҙенең теләгенә ирешә, тирә-йүнде танып белә, йәмғиәт тормошонда актив ҡатнаша, хеҙмәттән, уйындан ҡәнәғәтлек таба.

МӘҠӘЛДӘР

Һаулыҡ – ҙур байлыҡ.

Халыҡ һаулығы – дәүләт байлығы.

Байлыҡ – бер айлыҡ, һаулыҡ – ҙур байлыҡ.

СПОРТ.

ҺҮҘҘӘР

ат сабышы – конные скачки
атыу – стрельба
бейеклек – высота
битлек – маска
бүләк – подарок
донъя – мир
еңеүсе – победитель
йөҙөү – плавание
йүгереү(се) – бег(бегун)
көрәш – борьба
күнекмә – упражнение
ҡағиҙә – правило
ҡаршылыҡ – преграда
ҡатнашыусы – участник
ҡотлау – поздравление
майҙан – площадь
мылтыҡ – винтовка
оҙонлоҡ – длина
оҫталыҡ – мастерство
спорт төрө – вид спорта
сана – сани
саңғы – лыжи

спортсы – спортсмен
таҫтамал – полотенце
тиҙлек – скорость
түңәрәк – кружок
уҙыш – гонка
үҙгәрештәр – изменения
урын – место
һаулыҡ – здоровье
һикереү – прыжок
һыбайлы – всадник
ярыш – соревнование

бейек – высокий
беренсе – первый
етеҙ – быстрый
көслө – сильный
күп – много
мәргән – меткий
отҡор – шустрый
сыҙамлы – выносливый
танылған – известный
тиҙ – быстрый
түҙемле – терпеливый
үткер – острый
һаҡлаусы – защитный
һиҙгер – чувствительный

алда – впереди
алыҫ – далеко
оҙаҡ – долго
яҡшы – хорошо

алҡышларға – приветствовать
башҡарырға – выполнят
берҙәмләшергә – объединяться
еңергә – победить
йөҙөргә – плавать
йөрөргә – ходить
йүгерергә – бегать
күтәрергә – повышать
ҡатнашырға – участвовать
ҡыуанырға – радоваться
нығытырға – укреплять
сынығырға – закаляться
тырышырға – стараться
урын алырға – получить место
үтәргә – выполнять (правила)
һайларға – выбирать
һаҡларға – беречь
шөғөлләнергә – заниматься
ынтылырға – стремиться
әҙерләнергә – готовиться
ярышырға – соревноваться
яуларға – завоевать

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Тиҙлеккә йөҙөү, арҡала йөҙөү, беренсе урын яулаған, мәргән атыу, атта сабыу ярыштары, аттарҙы ҡарау, ҡаршылыҡ аша атта һикереү, ҡаршылыҡтарҙы еңеү, ҡатнашыусылар көрәшә, ярыша, мылтыҡтан атыу, сыҙамлы спортсы, күнекмәләр эшләйҙәр, еңеүгә шатланалар, ярыш этаптарын үтергә тейеш, ҡағиҙәләр үтәргә кәрәк, ярышта ҡатнашыусы үҫмерҙәр, һаулыҡты нығытыу, спорт сыныҡтыра, үткер рапира, ҡаршылыҡ аша һикерәләр, етеҙ ат кәрәк, шәп йүгереүсе.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Аттар ипподромда ярыша.
Аттар сыҙамлы булырға тейеш.
Ярышта йүгереүселәр ҡатнаша.
Тамашасылар еңеүселәрҙе алҡышлай.
Спорт атышында ҡатнашыусылар мәргәнлектә ярыша.
Ҡатнашыусылар тиҙ һәм отҡор булырға тейеш.
Ҡатнашыусылар беренсе урын яуларға тырыша.
Йөҙөүселәр ярыш ҡағиҙәләрен үтәргә тейеш.

Иң ҡыҙыҡлы спорт төрө – фехтование.
Спорт менән шөғөлләнеү һаулыҡты нығыта.
Спортсылар бала саҡтан түҙемле булалар.
Танылған спортсы донъя чемпионы титулын яулаған.
Йөҙөү кешене сыныҡтыра, иммунитетты күтәрә.
Үҫмерҙәр ярышҡа әҙерләнгәндә күнекмәләр эшләйҙәр.
Үҙеңә оҡшаған спорт төрөн һайларға кәрәк.
Еңеүселәргә ҙур бүләктәр бирәләр.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Һаумы, Тимур!
– Сәләм, Айҙар!
– Ҡайҙа китеп бараһың?
– Бассейнға. Ярты сәғәттән секциям эшләй башлай.
– Һиңә йөҙөү спорты оҡшаймы?
– Эйе, ике йыл шөғөлләнәм инде.Сыныҡтым.
– Унда йөрөү өсөн нимәләр кәрәк?
– Дауахананан тейешле справкалар ал да кил.
– Ярар, рәхмәт. Килермен.

– Һаумыһығыҙ, Марат Ғәлиевич.
– Һаумыһығыҙ, балалар.
– Бөгөн беҙ нимә эшләйәсәкбеҙ?
– Бөгөнгө дәрестә беҙ туп менән күнекмәләр эшләйәсәкбеҙ.
– Яҡшы. Беҙ туп менән уйнарға яратабыҙ.
– Тупты дөрөҫ тотоу, атып бәреү күнекмәләрен дөрөҫ эшләргә кәрәк.
– Эйе, ана үткән дәрестә Милана ҡулын ауырттырҙы.
– Әйҙәгеҙ, башлайыҡ. Уңыштар. Иғтибар менән тыңлағыҙ һәм ҡарағыҙ.

ТЕКСТ

Минең яратҡан спорт төрөм йүгереү спорты. Бәләкәй саҡтан тиҙ йүгерә торғайным. Үҫкәс профессиональ йүгереү менән шөғөлләнергә булдым. Йыл һайын бер нисә ярышта ҡатнашып яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәм. Яҡындарым да минең өсөн шатлана.

Ниндәй генә спорт төрө булмаһын, кеше тәне, йәне өсөн был шөғөл кәрәк. Профессиональ кимәлдә булмаһа ла, үҙең өсөн фитнесҡа аҙнаһына ике тапҡыр йөрөү файҙалы буласаҡ. Өйҙә лә спорт менән шөғөлләнеп була. Спорт кәрәк-яраҡтары магазинында бөтә нәмә лә һатыла. Инструкторҙар белмәгәнде өйрәтергә лә мөмкин. Спорт – ул һаулыҡ.

ҺӨНӘРҘӘР. ПРОФЕССИИ.

ҺҮҘҘӘР

аҡса – деньги
аш-һыу – еда
ашнаҡсы – повар
ашханасы – работник столовой
баҡсасы – садовник
балыҡсы – рыбак
бина – здание
бөҙрәхана – парикмахерская
ғалим – ученый
йөрөтөүсе – водитель
йорт – заведение
китапханасы – библиотекарь
ҡайсы – ножницы
ҡорал – инструмент
ҡотҡарыусы – спасатель
оҫта – мастер, өй – дом
өлкә – область
рәсем – рисунок
рәссам – художник
сара – средство
сәс алыусы – парикмахер
табип – врач, тарихсы – историк
тегенсе – швея, портной
тимерсе – кузнец, тире – кожа
төҙөлөш – строительство
төҙөүсе – строитель
туҡыма – ткань
тәржемәсе – переводчик
уҡытыусы – учитель
уҡыусы – ученик
умартасы – пчеловод
урам – улица
үҫеш – рост
хеҙмәткәр – служащий
хикәйә – рассказ
хәүефһеҙлек – безопасность
һаҡланыу – защита
һалдат – солдат
һатыусы – продавец
һатып алыусы – покупатель
һөнәр – профессия
һөнәр эйәһе – специалист
шағир – поэт
шиғыр – стихотворение
шәфҡәт туташы – медсестра
энә – игла
эшмәкәрлек – деятельность
эшкәртеүсе – обработчик
эшсе – рабочий
эш хаҡы – зарплата
юл – дорога
яҙыусы – писатель
янғын һүндереүсе – пожарный
ярҙамсы – помощник
ауыр – тяжелый
билдәле – известный
ғилми – научный
дөрөҫ – правильный, верный
ентекле – тщательный
киң – широкий
күп ҡатлы – многоэтажный
ҡатмарлы – сложный
ҡыйыу – смелый
танылған – признанный
тәмле – вкусный
тәүлек әйләнәһенә – круглосуточно
тырыш – старательный
хәрби – военный
эшсән – трудолюбивый
юғары – высокий, высоко
яуаплы – ответственный
баҫтырырға – издавать
башҡарырға – выполнять
бешерергә – печь
ҡыҙыҡһындыра – интересует
тегергә – шить
тоторға – ловить
төҙөкләндерергә – благоустраивать
төҙөргә – строить
төшөрөргә – рисовать
түләргә – платить
тәржемә итергә – переводить
уҡытырға – обучать
үҫтерергә – выращивать
хеҙмәт итергә – служить
хыялланырға – мечтать
һайларға – выбирать
һаҡланырға – беречься
һаҡларға – оберегать, беречь
һалырға – класть, строить
һатырға – продавать
һүндерергә – тушить
эшкә алырға – взять на работу
эшләргә – работать
әҙерләргә – готовить

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Тире эшкәртеүсе, күп һөнәр эйәләре, полиция хеҙмәткәре, йорттар һалыусы һөнәре, эш ҡоралдары, хәрби хеҙмәткәр, хәүефһеҙлек һаҡлау, ғилми институтта эшләй, баҡса үҫтерә, рәссам рәсем төшөрә, билдәле ғалим, заводҡа эшкә алалар, яңы өй төҙөй, эште оҫта башҡара, юлды төҙөкләндерәләр, диңгеҙҙә балыҡ тоталар, ҙур эш хаҡы, тегенсенең ҡоралы, оҫта сәс алыусы.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Минең атайым янғын һүндереүсе.
Һәр һөнәрҙең оҫтаһы бар.
Киләсәктә табип булырға хыялланам.
Яҙыусылар роман, повесть, хикәйәләр баҫтыралар.
Һалдаттар ил сиктәрендә хеҙмәт итәләр.
Әсәйем һатыусы булып эшләй.
Юғары уҡыу йорттарында белемле һөнәр эйәләре әҙерләйҙәр.
Ашнаҡсылар ашханала тәмле аштар бешерәләр.
Төҙөүселәрҙең эштәре ауыр һәм ҡатмарлы.
Һөнәрҙе дөрөҫ һайларға кәрәк.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ

– Сәләм, Светлана!
– Һаумы, Дамир!
– Ҡайҙа китеп бараһың?
– Һөнәр һайлау буйынса лекция уҡыйҙар, тыңлағым килә.
– Ә мин һөнәрҙе һайланым инде. Теш врачы булам.
– Яҡшы. Ә мин әлегә һайлай алмайым. Һөнәр киләсәк менән бәйле. Шуға бик яуаплы ҡарайым.
– Эйе, һин аҡыллы ҡыҙ. Афарин, Светлана! Һау булып тор!
Уңыштар!

– Антон, һаумы!
– Һаумыһығыҙ, Вилдан Вәлиевич!
– Кисә һине магазинда күргәйнем, эшләйһеңме әллә?
– Эйе, ата-әсәйемә ярҙам итәм. Юлыма, аҙыҡ-түлеккә етерлек эш хаҡы түләйҙәр.
– Афарин, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Ата-әсәйеңә рәхмәт, шундай эшсән, тырыш егет үҫтергәндәр.
– Рәхмәт, Вилдан Вәлиевич.
– Лекцияға һуңлама, табип һөнәренә лә тырышып уҡырға кәрәк. Эйе, һуңламаҫмын, һау булығыҙ.

ТЕКСТ

Һөнәр эйәһе булыу

Донъяла меңәрләгән һөнәр бар. Кеше үҙенә яраған һөнәрҙе тик үҙе генә һайлай ала. Бының өсөн ул ҡыҙыҡһынған йүнәлештәрен барларға тейеш. Дөрөҫ һөнәр һайлау өсөн тестар ҙа эшләргә була. Был бик мөһим мәсьәлә. Сөнки кешенең киләсәге уның һөнәре менән бәйле.

Мин …… һөнәрен һайлайым. Сөнки был һөнәр эйәләре …., …., …. кешеләр. Улар кешелеккә, илгә ҙур үҫеш килтерә.

Бының өсөн миңә ….юғары уҡыу йортона уҡырға инергә кәрәк. Мин тырышып имтихандарға әҙерләнәм.

МӘҠӘЛДӘР

Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.
Түккән көсөң буш булмаҫ, эшләгән күңел хуш булмаҫ.
Тырышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.
Тырышҡан кеше ас ҡалмаҫ.
Тырышҡан – моратына ирешкән.
Һөнәре бар ҡом өҫтөндә кәмә йөрөтөр.
Һөнәр – һөнәрле ҡулында ғына һөнәр, һөнәрһеҙ ҡулында түмәр.
Һөнәрле кеше – ҡоралды кеше.
Эшең һәм аҡылың барҙа һаулығыңа үлем булмаҫ.
Эш башында маҡтанма.

ҮҪЕМЛЕКТӘР. РАСТИТЕЛЬНЫЙ МИР.

ҺҮҘҘӘР

ағас – дерево
ағас төбө – пень
аҡлан – поляна
бесән – сено
болон – луг
ботаҡ – ветка
бөрө – почка
бүрәнә – бревно
бәҫ – иней
бәшмәк – гриб
гөл – цветок
гөлләмә – букет
дала – степь
дарыу үләне – лекарственная трава
ел – ветер
еләк – ягода
емеш – фрукт
ерек – ольха
имән – дуб
йәшелсә – овощи
йүкә – липа
кесерткән – крапива
күләгә – тень
кәбән – стог
ҡайын – береза
ҡарағай – сосна
ҡарағас – лиственница
ҡуҙғалаҡ – щавель
ҡурсаулыҡ – заповедник
ҡылған – ковыль
ҡыуаҡ – кустарник
ләлә – лилия
миҙгел – время года
мәтрүшкә – душица
олон – ствол
өйөм – куча
рауза – роза
сәскә – цветок
тал – ива
тамыр – корень
тирәк – тополь
төнәтмә – настойка
тубырсыҡ – шишка
туғай – луг
тупраҡ – почва
умырзая – подснежник
уҫаҡ – осина
урман – лес
үгәй инә үләне – мать-и-мачеха
үлән – трава
һабаҡ – стебель
шыршы – ель
ынйы сәскә – ландыш
ысыҡ – роса
энә – иголка, хвоинка
юл япрағы – подорожник
ялан – поле
япраҡ – лист

бейек – высокий
ваҡ – мелкий
йәшел – зеленый
кипкән – высохший
көпшә – трубчатый
ҡалын – толстый
ҡарт – старый
мәңгелек – вечный
оҙон – длинный
туҡлыҡлы – сытный
тәпәш – низкий
файҙалы – полезный
хәтфә – бархатный, зеленый
хуш еҫле – ароматный
һирәк – редкий
ылыҫлы – хвойный
эре – крупный
әсе – кислый

бөрөләнә – набухают почки
елберләргә – развеваться
йыйырға – собирать
киптерергә – сушить
өйөргә – складывать
өлгөрөргә – поспевать
сабырға – косить
сәсергә – сеять
сәскә атырға – цвести
сәскәгә күмелергә – утопать в цветах
тамсылап – каплями
төшөргә – выпасть
тырмарға – грести
ултыртырға – сажать
утарға – полоть
үҫтерергә – выращивать
һарғайырға – желтеть

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Дарыу үләндәре, кипкән сәскәләр, мәтрүшкә файҙаһы, бесән эшләү, кәбән өйөү, ағас ултыртыу, ағастар бөрөләнә, урманда үҫәләр, үгәй инә үләне киптерҙем, шыршы тубырсыҡтары йыйырға, бесән тырмау, ағас күләгәһендә ултырам, әсе ҡуҙғалаҡ, ҡайын япраҡтары, имәнлектә булдым, хәтфә болонда уйнай, болон сәскәләре, ағас олоно, тал төбө, ваҡ һәм эре сәскәләр, тәпәш ҡыуаҡтар, көпшәле үлән, ылыҫлы урман, ағастарға бәҫ төшкән, ынйы сәскәләр яланы, һары мәтрүшкә файҙалы, емеш-еләк баҡсаһы, еләк йыйыу миҙгеле, ҡалын олонло ағас, кесерткән ашы, елдә елберләй.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Ҡурсаулыҡта һирәк үләндәр үҫә.
Әсәйемә атайым менән матур гөлләмә бүләк иттек.
Баҡсала төрлө йәшелсәләр, емеш-еләк ағастары үҫтерәбеҙ.
Апайым тәҙрә төбөндә гөлдәр үҫтерә.
Урман-болондарҙа үҫемлектәр сәскә атҡан.
Ағас көслө булһын өсөн тамырҙарын нығытырға кәрәк.
Йүкәләр сәскәгә күмелеп ултыра.
Беренсе яҙғы сәскә – умырзая.
Йәй көнө ауыл халҡы бесән эшләй.
Дарыу үләндәренән төнәтмәләрҙе тамсылап эсәләр.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯҺЫ

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар.
– Һаумыһығыҙ, Асия Әнүәровна!
– Бөгөн беҙ Өфөнөң ботаника баҡсаһына барабыҙ.
– Унда нимәләр бар?
– Унда Ер шарының төрлө төбәктәренән үҫемлектәр үҫә, хатта банан ағасы ла бар. Төрлө сәскәләр үҫтерәләр.
– Яҡшы, ә «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгәндәре бармы икән.
– Әлбиттә, һирәк үҫемлектәр ҡурсаулыҡтарҙа ла бар.
– Әйҙәгеҙ, Асия Әнүәровна, ҡуҙғалайыҡ, тиҙерәк күрге килә.
– Әйҙәгеҙ.

– Әсәй, өләсәйем беҙгә ҡасан ҡунаҡҡа килә?
– Саҡырайыҡ, хәҙер генә килеп етә ул. Ә ниңә һорайһың?
– Ул, мин йығылғас, аяғыма май һөрткәйне, тиҙ ярҙам итте. Мин тағын да аяғымды ауырттырҙым.
– Әә, һары мәтрүшкә майы бит ул. Ысынлап та, ярҙам итә. Өләсәйең үләндең шифаһын белә шул. Хәҙер шылтыратып саҡырайыҡ.
– Эйе, мин уны һағындым. Мине дауалап алһын.
– Дарыу үләндәреңде алып кил, тиермен.
– Рәхмәт, әсәй.

ТЕКСТ

Үҫемлектәр донъяһында

Башҡортостандың үҫемлектәр доньяһы бик бай. Был беҙҙең климат һәм тыуған еребеҙҙең урынлашыуы менән бәйле. Башҡортостанда төрлө ағаслы ҡуйы урмандар күп. Йылғалар һәм йөҙгә яҡын күл буйҙарында хуш еҫле сәскәләр, тау битләүҙәрендә һирәк, реликт үләндәр етерлек. Ғалимдар Башҡортостандың үҫемлектәрен өйрәнәләр, төрлө ғилми хеҙмәттәр яҙалар.

Башҡортостанда үҫемлектәрҙең һирәк осрай торған һәм юғала барған төрҙәрен һаҡлап алып ҡалыу маҡсатында милли парктар һәм ҡурсаулыҡтар булдырылған. Унда үҫемлектәрҙе өйрәнеү, иҫәпләү, системалаштырыу һәм ҡурсалау үткәрелә. Шулай уҡ күп үҫемлек төрҙәре Башҡортостан Республикаһының «Ҡыҙыл китаб»ына индерелгән.

МӘҠӘЛДӘР

Тирәгең булһа, терәгең булыр.
Тирәктең сайҡалыуы елдән, түрәләрҙең көн күреүе илдән.
Үләнле ер – үлмәгән, кейекле ер – бөлмәгән.
Ысыҡһыҙ үлән үҫмәҫ.
Ялан йәме көлтә менән.
Иген ҡамылынан билгеле.
Иген ер һыуына үҫмәй, тир һыуына үҫә.

СӘЙӘХӘТ. ПУТЕШЕСТВИЕ.

ҺҮҘҘӘР

ара – расстояние
аҡса – деньги
биләмә – территория
ваҡиға – событие
ваҡыт – время
ғөрөф-ғәҙәт – обычаи
ғүмер буйы – всю жизнь
диңгеҙ – море
дәрүиш – отшельник
донъя – мир
ҡағиҙә – правило
ҡала – город
ҡунаҡхана – гостиница
ил – страна
йәмғиәт – общество
йәшәйеш – жизнедеятельность
кисереш – впечатление
кешеләр – люди
көнкүреш – быт
маҡсат – цель
мәҙәниәт – культура
сик – граница
сит – чужой
сит ил – заграница
сәйәхәт – путешествие
сәйәхәтсе – путешественник
тарих – история
тел – язык
усаҡ – костер
урман – лес
утрау – остров
утын – дрова
халыҡ – народ
хис, тойғо – чувства
хәл – ситуация, обстоятельство
хәрәкәт – движение
һуҡмаҡ – тропа
шырпы – спички
шәхес – личность
юл – дорога
юл күрһәткес – указатель
юлсы – путник
юлдаш – спутник
яҡ – сторона
ял – отдых

билдәле – известный
ҙур – большой
иҫтәлекле – запоминающийся
йылы – теплый
киң – широкий
күренекле – достопримечательный
кәрәкле – необходимый
ҡыҙыҡлы – интересный
сикһеҙ – безкрайний
тарихи – исторический
тәрән – глубокий

йыраҡ – далеко
йәйәү – пешком

барырға – идти
ил гиҙергә – странствовать
йөҙөргә – плыть
ҡарарға – смотреть
ҡыҙҙырырға – греть
ҡыҙыҡһынырға – интересоваться
мәңгеләштерергә – увековечить
оҡшай – нравится
осорға – лететь
танышырға – знакомиться
теркәлергә – зарегистрироваться
хәтерләргә – помнить
һөйләргә – рассказывать

ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР

Сит илгә сәйәхәт, мәҙәниәт менән танышырға, юл күрһәткесте уҡып бар, кешеләрҙең көнкүреше, бер шырпынан усаҡ ҡабыҙыу, сәйәхәтселәр тураһында һөйләргә, урманда кәрәкле һуҡмаҡ бар, кисерештәремде хәтерләйем, донъя күргем килә, иҫтәлекле ваҡиғалар, ҡунаҡханаға туҡтаным, сикһеҙ диңгеҙ оҡшай, иҫтәлектәремде мәңгеләштерергә кәрәк, минең юлдашым бул, ял кәрәк, йәмғиәт йәшәйеше, сит ил биләмәһендә.

ҺӨЙЛӘМДӘР

Мин сәйәхәт итергә яратам.

Сит ил кешеләре мәҙәниәтен өйрәнергә теләйем.

Класс менән урман ҡарарға барҙыҡ.

Поезд менән диңгеҙ аръяғындағы сит илгә барып булмай.

Иҫтәлектәремде мәңгеләштерер өсөн фотоаппарат алдым.

ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯҺЫ

– Һаумыһығыҙ, балалар!

– Һаумыһығыҙ, Әлиә Маратовна!

– Бөгөн беҙ урманға сәйәхәт итәбеҙ. Кәрәкле әйберҙәрҙе алдығыҙмы?

– Эйе, әсәйем аҙыҡты күп итеп һалды, бөтәһенә лә етерлек булһын тине.

– Афарин, Айҙар.

– Ә атайым бер шырпынан усаҡ яндырып ебәрергә өйрәтте.

– Әсәйең менән атайыңа рәхмәт әйтерһең, Айҙар. Тимәк, беҙ яҡшы ял итәсәкбеҙ.

– Ҡуҙғалайыҡ.

– Сәләм, Гөлшат!

– Сәләм, Дания!

– Ҡалай ҡояшта янғанһың! Әллә берәй сит илгә ял итергә барҙығыҙмы?

– Эйе, Испанияла булдыҡ. Ундағы ғөрөф-ғәҙәт бөтөнләй икенсе.

– Әлбиттә, икенсе халыҡ, мәҙәниәт һәм тарих.

– Әммә беҙҙе берләштергән нәмә – асыҡ күңелле булыуҙары.

– Яҡшы. Ә мин бер сит илгә лә барғаным юҡ. Киләсәктә, юлдаш тапһам, сәйәхәт итергә хыялланам.

– Дания, мин һиңә юлдаш була алам. Мин ысын сәйәхәтсе, сит телдәрҙе лә беләм.

– Рәхмәт, бергә юлға сығырбыҙ.

ТЕКСТ

Сәйәхәтселәрҙең тормошо бик ҡыҙыҡ. Үҙҙәренең аң-белем даирәһен киңәйтеү маҡсаты менән улар күп илдәргә сәйәхәт итәләр. Мөмкинлек бар икән, улар дәрүиш һымаҡтар, өйҙә тик ултырмайҙар. Сит илдәрҙең тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, сәнғәтен өйрәнәләр. Халыҡтарҙың тормошо, ғөрөф-ғәҙәттәре менән танышалар. Һәр илдән үҙҙәренә иҫтәлекле сувенир алып ҡайталар. Ләкин, ҡайҙа ғына барһаң да, тыуған ер ҡәҙерлерәк.

МӘҠӘЛДӘР

Сит өйҙөң түшәгендә йоҡлағансы, үҙ өйөңдөң иҙәнендә йоҡла.

Ситтә йөрөгән тарығыр, тыуған илен һағыныр.

Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.

Сит ерҙең гөлөнән үҙ ереңдең дегәнәге артыҡ.

Тыуған ер – яҡын, тыуған ил – алтын.

Тыуған илдең ҡәҙерен ситтә йөрөһәң белерһең.

Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.